*Марс НУРИЕВ*

# БЫУАТ АНАТЫНДА

## Повесть*



* *Повесть журнал вариантында ҡыҫҡартылып бирелә.*

Һуғыш башланыу хаҡындағы ҡайғылы хәбәрҙе Амангилдин яланда, тимер айғыры менән эш өҫтөндә ҡаршыланы. Тракторсылар ауылда ла бик кәрәк булғанлыҡтан, Сынтимерҙе, бронь биреп, һуғышҡа ебәрмәнеләр.

Ә ҡәһәрле һуғыш ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Немецтар илдең үҙәгенә үк яҡынлашҡан һайын тылда ла хеҙмәт күсөргәнешлелеге артҡандан-арта барҙы. Ҡар ҡатыш ямғырҙа ла, көслө һыуыҡ елдә лә, ҡояштың көйҙөргөс нурҙары аҫтында ла Сынтимер тракторы менән баҫыуҙа булды. Колхоз рәйесе лә, агроном да, бригадир ҙа, хисапсы ла, хатта район үҙәгенән килеп йөрөгән уполномоченный ҙа уның эшен даими тикшереп торҙолар.

Ауыр эш өҫтөндә 1941 йылдың йәйе үтеп, көҙө етте. Сынтимер туғай буйындағы уңдырышлы ҡара тупраҡлы ерҙе туңға һөрөп йөрөй ине. Төштән һуң ямғыр ҡоя башланы. Көҙгө ямғыр, билдәле инде, бер яуа башлаһа, туҡтауҙы белмәй. Әммә ямғыр яуа тип, эште ташлап, ҡайтып китергә ярамай. Сынтимер ҙә эшен дауам итте. Ҡойоп яуған ямғырҙар былай ҙа дымлы тупраҡты ныҡ йомшартҡайны. Бер рәтте ҙур ҡыйынлыҡ менән һөрөп бөттө. Икенсе рәткә төшөп, йөҙ метр ҙа бармағандыр, трактор туҡтап ҡалды. Батҡаҡҡа әйләнгән тупраҡ, артҡы тәгәрмәстәрҙең теш araларына тулып, шымарҙы. Трактор ергә терәлеп үк кереп ултырҙы. Артҡы тәгәрмәстәр бер урында зыр әйләнеп ултыралар ине. Тимер ат урынынан ҡуҙғалыу түгел, хатта ҡымшанмай ҙа. Сынтимер өҙлөкһөҙ яуып торған ямғырҙа һаҙға әйләнгән ерҙе һөрә алмаясағын аңланы. Ямғыр тымып, ер кипшенгәс кенә эште дауам итергә мөмкин. Унда ла ер эсенә сумған тракторҙы күтәрмәйенсә, ҡуҙғатып алып китеп булмаясаҡ. Сынтимер “холостойға” эшләп ултырған тракторын һүндерергә уйланы. Шул ваҡыт бер һыбайлы күренде, шуға тракторын һүндермәй торорға булды. Янына килеп еткәс, эйәр өҫтөндә ултырған кешенең район үҙәге уполномоченныйы Николаев Йәгүр икәнен танының. Халыҡ уны “ҡара сыуаш” тип йөрөтә. Ҡап-ҡара табаҡ битле булғаны өсөн шулай тиҙәр. Ул, килеп етеү менән башҡорт телен ватып-емереп, Сынтимергә ҡысҡырырға кереште:

— Нигә ер сүрмисез, иптәш Амангилдин?

— Ямғыр яуа бит. Етмәһә, трактор батты. Буксовать итеп тик ултыра. Һөрөп булырлыҡ түгел.

— Ямғыр яумый, тип әйт! Партия шулай ҡуша.

— Яуған ямғырҙы нисек яумай, тип әйтәйем мин? Күрмәйһеңме ни яуғанын?

— Фронттағы хәлне пеләсеңме син?

— Беләм!

— Тракторыңа утыр да, жирне сүр!

Сынтимер тракторҙың тимер ултырғысына ултырҙы ла табалдырығына баҫты. Артҡы ҙур тәгәрмәстәр зыр әйләнә башланы, әммә трактор урынынан ҡуҙғалманы.

— Бына күрҙегеҙме инде, — тине Сынтимер секерәйеп ҡарап торған Йәгүргә. — Мине алдаша тип уйлайһығыҙмы әллә?

— Мин бер нәрсә дә пелмим. Путәннәр мондый көннө жир сүргәндә, син ниңә сүрә алмыйсың? Бу — настоящий саботаж, вредительство. Мин хәзер кайтып райкомға докладной язачакмын. Бронеңне алдыртам. Бронгә ышыкланып, ансатка салышып ятырга уйлыйсыңмы?

— Туҡтап тор, улай булғас, мин һинең үҙеңә генә бер һүҙ әйтәйем әле, — тине Амангилдин, бик тә мөһим хәбәр бар тигәнгә ишара яһап.

— Нинди хәбәр ул? Әйт улай булғас хәбәреңне.

Сынтимер тракторынан төшөп, һыбайлының эргәһенә яҡын килде һәм, ат өҫтөнән һөйрәп төшөрөп, Николаевты ергә һуғып йыҡты. Елкәһенән тотоп, трактор эргәһенә һөйрәп килтерҙе лә кәүҙәһен артҡы тәгәрмәс аҫтына тыҡты. Үҙе трактор өҫтөнә һикереп менде һәм табалдырыҡҡа баҫты. Тәгәрмәстәр зыр әйләнә башланы. Ҡото осҡан Николаев трактор аҫтынан ҡайһылай килеп сыҡҡанын да һиҙмәне. Ул йүгереп барып атына менергә уйланы, ләкин Амангилдин, тракторҙан һикереп төшөп, Николаевты ҡыуып етте һәм тағы ла һуғып йыҡты. Ҡиренән трактор тәгәрмәсе аҫтына һөйрәп алып китә башлағас, Йәгүр бөтә көсөн йыйып ҡысҡырырға тотондо:

— Разбой, ҡотҡарығыҙ, үлтерәләр!

Сынтимер уны утын ағасы һымаҡ тағы ла тәгәрмәс аҫтына тыҡты һәм тракторға менеп, артҡы тәгәрмәстәрҙе йәнә зыр әйләндерә башланы. Йәгүр был юлы ла сығып өлгөрҙө.

— Күрҙеңме инде тракторҙың ер һөрә алмағанын?

— Күрҙем, туғаным. Күрҙем. Трактор жир сүрә торган көн түгел бүген.

Амангилдин тағы ла кабинанан һикереп төштө. Уполномоченный эргәһенә килеп:

— Докладнойыңды яҙырһыңмы минең өҫтән? — тип ҡаты итеп һораны.

— Юҡ, туғаным, бер нәрсә дә язмыйм. Ышанмасаң, бына ҡара, — Йәгүр бер нисә тапҡыр суҡынып ҡуйҙы.

Сынтимер Николаевтың кейеме, бысраҡҡа буялып, ҡап-ҡара төҫкә ингәнлеген шәйләне. Битен кеше танырлыҡ түгел — батҡаҡ уның танау, ҡолаҡ тишектәренә тиклем тулғайны. Сынтимерҙең көләһе килде, әммә көлмәне — тыйылып ҡалды.

— Тиҙерәк күҙемдән юғал, олаҡ бынан! — тип бойорҙо Сынтимер ҡара сыуашҡа.

Егор көскә аты өҫтөнә менеп, ауыл яғына сапты. Ул һүҙендә торманы — шул көндө үк райкомға барып, Сынтимер өҫтөнән докладной яҙҙы. Ундағылар шул минутта уҡ военкоматҡа хәбәр иттеләр. Иртәгәһен иртүк килеп, бронде тартып алдылар.

“Саботажник” тигән хурлыҡ тамғаһы баҫып, Сынтимерҙе ҡулға алдылар. Лагерға алып китергә килгән милиционерҙар уға ҡатыны менән хушлашырға бер нисә минут ҡына ваҡыт бирҙеләр. “Һуңғы тапҡыр ғына булмаһын инде был айырылышыу”, — тигән теләк менән хушлашты Гөлбоҫтан ире менән. Яратҡан кешең менән айырылышыу бигерәк ҡыйын икән.

Гөлбоҫтан Сынтимергә һөйөклө ир итеп кенә түгел, ә ышанyслы терәк, бәхетшатлыҡ килтереүсе итеп тә ҡарай, уға үҙенә ҡарағанда ла нығыраҡ ышана. Ирен төрмәгә оҙатҡан саҡта ҡолағына ошондай һүҙҙәр шыбырланы: “Һине, моғайын, барыбер һуғышҡа ебәрерҙәр. Ғәзиз башҡайыңды һаҡлап йөрө. Һау-сәләмәт йөрөп ҡайт. Ә мин һине һағынып көтөрмөн. Хуш, бәғерем”. Гөлбоҫтан башын иренең күкрәгенә һалып, һулҡылдап илап ебәрҙе.

Ҡатыны Сынтимергә дөрөҫ әйткән икән. Ырымбур өлкәһендәге Тоцкий лагерына барып эләккәс тә, ҡорал тота алырлыҡ бөтә тотҡондарҙан штраф батальоны төҙөнөләр. Сынтимер ҙә шунда эләкте. Уларҙы, һуғышҡа китәсәк яугирҙарҙы, яҡындағы хәрби гарнизонға күсерҙеләр. Туп-тура фронтҡа алып барып индермәнеләр, башта хәрби эштең айышына өйрәтергә булдылар. Штык

һуғышына, ҡорал менән эш итергә, винтовканы, ҡул пулемётын күҙ йомоп һүтергә, киренән ҡорорға өйрәнделәр. Был ваҡытта немецтар, көс туплап, Мәскәүгә табан ташландылар. Уларға ҡаршы Брянск фронты ғәскәрҙәре оборона һуғыштары алып барҙы. Сигенеүсе Совет Армияһы ҙур юғалтыуҙар кисерә ине. Немецтарҙың Тулаға бара торған юлына командование резервтан 1-се гвардия уҡсылар корпусын ҡаршы ҡуйҙы. Уға ҡушымта итеп, Амангилдин хеҙмәт иткән штраф батальонын оҙаттылар. Был 1941 йылдың октябрь айында булды. Сынтимер хеҙмәт иткән уҡсылар взводы, туң ерҙә траншея, окоптар ҡаҙып, үҙенә позиция ҡорҙо.

Ҡаты бәрелеш, атака алдынан ваҡыт яй үтә. Һалдаттарҙы был минуттарҙа ауыр тойғолар биләп ала. Сынтимер ҡоралдарын тикшереп сыҡты: гранаталары үҙ урынында, винтовкаһы төҙөк күренә. Шулай ҙа күңеле тыныс түгел. Алдағы билдәһеҙлек уның йөрәген ҡыҫып-ҡыҫып ала. Ни тиһәң дә, немецтар менән беренсе тапҡыр йөҙгә йөҙ килеп осрашасаҡ. Һиҙеп тора: һуғыш аяуһыҙ буласаҡ. Был алышта имен-аман ҡалыуың икеле. Фронт буйлап уң яҡта ла, һул яҡта ла беҙҙең туптар гөрһөлдәп немец позицияларына ут яуҙыралар. Ә бына штраф батальонына ҡаршы торған немец позицияларына, нығытмаларына беҙҙең артиллерия ниңәлер ут асмай. Амангилдин һәм уның иптәштәре һиҙә: совет командованиеһы штраф батальонына үгәйһетеп, дошманға ҡараған кеүек ҡарай. Уға артиллерия уты менән дә, реактив снарядтар менән дә, авиация менән дә ярҙамлашмай. Әйҙә, штрафниктар аҙналар буйы ергә оялап, ныҒынып ятҡан немецтарҙы ҡоро ҡул менән соҡоп сығарһындар. Ә инде гитлерсыларҙың көслө утына эләгеп, ҡырылалар икән — ҡырылһындар. Улар бит лагерҙарҙан килгән “ҡоротҡостар”, “саботажниктар”, “халыҡ дошмандары”.

Бына бер ваҡыт дошман яғынан снарядтар штраф батальоны өҫтөндә ярыла башланы. Йыуан-йыуан ағастар, тамырҙары менән йолҡоноп, күккә ырғый, тонналап һауаға күтәрелгән туң ер окоптар, траншеялар өҫтөнә төшә. Амангилдин ут аҫтында ятҡанда шуны аңланы: ғәзиз ергә ни тиклем тәрәнерәк инеп ятһаң, ул һине шул тиклем нығыраҡ һаҡлай. Ниһайәт, һауаға ҡыҙыл ракеталар оса башланы. Был — батальонға атакаға күтәрелергә сигнал. Сынтимер траншеянан сығып, башҡалар менән бергә немецтарҙың позицияһына табан тәүге аҙымдарын яһаны, шунан йүгерергә тотондо. Батальон “Ура!” тауыштары аҫтында атакаға ташланды. Әле генә траншеяла боҫоп ултырған егеттәр ҡурҡыуҙы оноттолар. Немецтар ҙа утты көсәйтте, Сынтимерҙең баш осонан ғына дошман снаряды һыҙғырып үтте, пулеметтарҙан һәм минометтарҙан ут бөркөлдө. Үлеүселәр күбәйгәндән-күбәйҙе, батальон алға барыуҙан туҡталып ҡалды. Немецтарҙың көслө уты баш ҡалҡытырға ла ирек бирмәй. Күктә тағы ла ҡыҙыл ракета янғаны күренде. Взвод командирҙарының: “Алға, атакаға!” — тип тоноғораҡ тауыштар менән ҡысҡырғаны ишетелде. Яртылаш кәмегән батальон дошманға ҡаршы тағы ла атакаға күтәрелде. Улар винтовкаларҙан ата-ата немецтарҙың траншеяларына табан йүгерҙеләр һәм, дошман көслө ут яуҙырыуға ҡарамаҫтан, позицияларға яҡынлаштылар ҙа гитлерсыларҙың траншеяларына гранаталар сойорғоттолар. Был немецтарҙы ныҡ ҡына шаңҡытты, буғай. Яугирҙар, траншеяларға төшөп, гитлерсылар менән штыкка — штык, бысаҡҡа бысаҡ килеп һуғышырға тотондолар. Тегеләр ҡасырға керештеләр. Амангилдин тәүгеләрҙән булып дошман траншеяһына төштө һәм, бер немец һалдатының ҡасып барыуын күреп, уға арттан атырға уйланы. Ләкин уның иптәштәренән айырылған яңғыҙ һалдатты

атып үлтерергә ҡулы барманы. Немец һалдаты бер аҙ йүгереп барҙы ла, артына әйләнеп ҡараны. Ул Сынтимерҙең баҫтырмағанын, үҙенә атмағанын күреп, рәхмәт йөҙөнән бер ҡулын өҫкә күтәрҙе лә күҙҙән юғалды.

* * *

Ҡаты һуғыштан һуң һалдаттарға ял бирҙеләр. Әммә оҙаҡҡа түгел. Сөнки немецтар, стратегик яҡтан мөһим ҡалҡыулыҡтың ҡулдан ысҡыныуына риза булмайынса, контратакаға күтәреләсәк. Һуғыш тынып торған арала һалдаттар ата-әсәләренә, һөйгән йәрҙәренә, ҡатындарына хат яҙырға тотона. Сынтимер ҙә Гөлбоҫтанға хат яҙҙы. “Нурлы ҡарашың, мөләйем йылмайыуҙарың күҙ алдымдан китмәй. Ә инде йылмайған саҡтағы матур ирендәреңде мәңге онотторлоҡ түгел. Үҙемдең хеҙмәтем тураһында бер нисә һүҙ. Ҡыш башланды. Тар, төтөнгә тулған землянкаларҙа, ҡышҡы һыуыҡ окоптарҙа ятабыҙ. Төндә нимә бар, шуның менән төрөнөп ятабыҙ. Аслыҡ беҙҙең айырылмаҫ юлдашыбыҙға әүерелде. Ҡайһы саҡта көнөнә бер генә ашаған саҡтар була”, — тип яҙҙы ул ҡатынына.

* * *

Атака ваҡытында штраф батальоны яугирҙарының яртыһынан күберәге яу ҡырында башын һалды. Шундай ҙур юғалтыуҙар менән улар гитлерсыларҙың позицияларын баҫып ала алдылар. Етмәһә, һуғышсылар көслө ҡоралланған дошманды ҡоро ҡул менән генә тип әйтерлек еңде. Ләкин самалы ғына ҡалған һалдаттар гитлерсыларҙың контратакаларына оҙаҡ ҡаршы тора алмаҫ ине. Командование ҡаҡшаған батальонды йөҙҙән артыҡ һалдат менән тулыландырҙы. Улар ҙа — штрафниктар. Башҡортостандан да ир-егеттәр күп ине. Сынтимер Морат исемле яҡташы менән танышып китте.

Морат һуғыштың тәүге көндәренән үк фронтта була. Ул хеҙмәт иткән пехота полкы Брянск фронты составына инә. Яугир полкташтары менән бергә гитлерсыларға ҡаршы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Яу ҡырында уның яҡын дуҫтары, яҡташтары һәләк була, көтмәгәндә үҙе лә бәләгә тарый. Хәл былай була. Бер ваҡыт уны төнгә ҡаршы ротаның хәрби техникаһын ҡарауылларға ҡушалар. Морат хеҙмәт иткән подразделение ошоға тиклем ике тәүлек сигенеп килгән була, ә өсөнсөһөндә төндә немецтар менән ҡаты һуғыша. Өс көн йоҡламаған Морат поста торғанда йөк машинаһының баҫҡысына ултырып тора. Шунда уҡ йоҡомһорап китә. Ҡарауыл етәксеһе рота командирына был турала хәбәр итә, ә капитан Осокин бик ҡыҙыу, шәфҡәтһеҙ кеше була. Ул Моратты үлем язаһына тарттырырға ҡарар итә. Ғәҙәттә поста йоҡлаған часовойҙы гауптвахтаға ябып ҡуялар, һис юғында, был эште хәрби трибунал ҡарамағына бирәләр. Унда ла — часовойҙың йоҡлап китеүе арҡаһында дошман тарафынан берәй диверсия яһалған осраҡта ғына. Әммә ротала үҙен батша итеп хис иткән, шунлыҡтан ҡул аҫтындағы хәрбиҙәрҙе үҙ хөкөмө менән язаға тарттырып өйрәнгән капитан ике һалдатты саҡырып ала ла Моратты урман эсенә алып кереп атырға, аҙаҡ мәйетен күмергә бойора. Урман эсенә инеп, 200 метр самаһы ер киткәс, быларҙың эргәһенә генә снаряд төшөп шартлай. Морат ҡолаҡ тондорғос ҡаты шартлау тауышын ғына ишетә. Уны шартлау тулҡыны ситкә алып ырғыта. Һалдат йыуан ағасҡа бәрелеүҙән аңын юғалта. Ул ярты көн буйы иҫһеҙ ята. Ә был ваҡытта Морат хеҙмәт иткән полк позицияһын дошман самолеттары бомбаға тота. Со-

вет һуғышсылары көтөлмәгән был көслө һөжүмдән күпләп ҡырыла. Осокин ротаһынан да бер кем дә иҫән ҡалмай, капитан үҙе лә һәләк була.

Морат яйлап аңына килә. Ул үҙенең кәҫле тупраҡ аҫтында ятҡанын аңлай. Һалдат, өҫтөндәге ер киҫәктәрен ситкә ырғытып, ҡалҡынып аяғына баҫа һәм тирә-яғына ҡарай. Эргәлә генә снаряд шартлауҙан ҙур соҡор барлыҡҡа килгән. Соҡор тирәләй тамырҙары йолҡонған, һынып сырпаҡланған ағастар ята. Ә теге ике һалдаттың өҙгөләнгән киҫәктәрен генә таба Морат. Ҡулындағы автоматын яурынына аҫып, полк торған позицияға табан йүнәлә ул. Полк траншеяһы, дзоттар, землянкалар танымаҫлыҡ хәлгә килгән була. Шунда ғәйәт ҙур соҡорҙо шәйләй — баҡһаң, үлгән полк яугирҙарын күмә торған туғандар ҡәберлеге икән. Ҡәбер ҡаҙыусылар Моратты күреп ҡалып, уны һырып алалар... Ул башта һалдаттарға, унан һуң хәрби трибунал ағзаларына үҙенең башынан үткән хәлдәрҙе һөйләп бирә, ләкин берәү ҙә уға ышанмай. Уға “дезертир” тигән хурлыҡлы һәм ҡурҡыныс мөһөр баҫып, штраф батальонына оҙаталар...

Сынтимер ҙә әҙәм ышанмаҫлыҡ ауырлыҡтар, ғазаптар күрҙе һуғышта. Һәр алышта немецтар тәүҙә бөтә төр ҡоралдарҙан ут яуҙыралар. Уртала — штрафниктар, ә арттан, артҡа сигенмәһендәр тип, уларға үҙебеҙҙекеләр ата. Юҡ ҡына гонаһтары өсөн күпме кеше баш һалды тыуған ил өсөн...

Тыуған ергә иҫән-имен әйләнеп ҡайтыуына нисә йылдар үтһә лә, әле һаман һуғыш мәхшәрҙәре төштәренә кереп, тынғылыҡ бирмәй.

* * *

Төш тигәндәй, бер ваҡыт, әле Бишҡурайҙа йәшәгән сағында уҡ, Сынтимер төндә һаташып ҡысҡырырға тотондо:

— Һин, Йәгүр, эттән тыуған нәмә, мине һуғышҡа ебәреп, башымды ашарға уйлағайның — барып сыҡманы. Мин барыбер иҫән ҡайттым!

Йоҡлап ятҡан ейәне Йыһангир был тауышҡа уянып китте һәм олатаһын уятты:

— Олатай, тор, һаташып ҡысҡыра башланың бит, — тине ул уға.

— Нимә тинем һуң, улым? — тип һораны ҡарт.

Ейәне:

— Ниндәйҙер Йәгүрҙең исемен әйтеп ҡысҡырҙың. Ҡем һуң ул? Нишләп ул бәндә һинең башыңды ашарға теләне?— тип һорағас, һуғыш ветераны уға былай тип яуап бирҙе:

— Ул бәндә һуғыш ваҡытында уполномоченный булып йөрөнө. Үҙе сығышы менән Михайловка тигән ауылдан. Исем, фамилияһы — Егор Николаев. Мине, тракторист буларак, бронь менән һуғыштан ҡалдырғайнылар. Яланда ер һөргәндә шул бәндә менән аҙыраҡ әләгешеп киткәйнек. Ул юғарыға минең өҫтән шикәйәт яҙып ебәргәс, мине фронтҡа алып киттеләр. Күрәһең, шул төшкә ингәндер.

Сынтимер йәнә хәтирәләргә сумды.

* * *

Еңеүҙе ул Берлинда ҡаршыланы. Ниндәй ҡыуаныслы мәл булды яугирға һөйөклө ҡатынын ҡайтып күреү! Тик уларҙың бер нисә йыл балалары булмай торҙо. Аҙаҡ улдары тыуҙы, Сынтимер менән Гөлбоҫтан малайға Алмаз тип исем ҡуштылар. Алмаз армияға тиклем Стәрлелә сварщиклыҡҡа уҡығайны. Өс йыл хәрби хеҙмәттә булып ҡайтҡас, колхозда ошо һөнәр буйынса эшләп йөрөнө.

Тап шул осорҙа ауылға фельдшер булып бер ҡыҙ килеп төштө. Зәһирә икән исеме. Егет уны яҡындан да, ситтән дә күҙәтеп йөрөнө, ә бер көндө клубтан һуң яҡындан танышты һәм уны фатирына тиклем оҙата барҙы. Улар бер-береһен яратып, өйләнешеп ҡуйҙылар.

Тәүҙә ата-әсәләрендә торҙолар. Ике ғаилә бер йортта йәшәгәс, ҡыҫынҡылыҡ тиҙ һиҙелде. Егеттең күңеле ҡалаға тартыла башланы. Эшләп, фатир алһам, ғаиләм менән иркенерәк тормошта йәшәрмен, тип уйланы ул. Тик ҡайҙа китергә? Новосибирск тарафына юлланырға булды ул. Армияла шунда хеҙмәт иткәйне. Ул саҡта еңел-елпе уйҙар юлдаш булһа, хәҙер өйләнеп, ғаиләһе булғас, уға донъяға етди ҡарарға кәрәк. Малайҙары Йыһангирға ла дүртенсе йәш китте.

Етмәһә, Алмаз эшенән дә ҡәнәғәт түгел ине. Колхозда эш хаҡы самалы, йәш ғаилә башлығы ул ғына аҡсаға мөрхәтһенмәне.

— Мин Себергә китәм, — тине ул атаһына бер көндө.

— Ситтә лә һиңә байлыҡ әҙерләп ҡуймағандарҙыр. Тырышып донъя көткән кеше бында ла хур булмай, — тип ҡаршы төштө Сынтимер.

— Тырышып эшләү менән, аҡсаһы булмағас. Емереп эшләп, көрәп аҡса ала торған ваҡытта ҡоро төкөрөк һурып, буш кеҫәләрҙе елберләтеп йөрөүҙән ни файҙа?!

Сынтимер ағай олоғайған көнөндә берҙән-бер улын ер аяғы — ер башына ебәрергә теләмәй ине. Оҙон аҡса, еңел тормош эҙләп, йә булмаһа үҙ ихтыярынан тыш алыҫ ерҙәргә китеп бәхетһеҙлеккә тарыған байтаҡ ауылдаштарын белә Сынтимер. Ә күпме йәш ғаиләләр тарҡалды сит тарафтарҙа! Бигерәк тә ҡайҙа ла аҙсылыҡты тәшкил иткән башҡорт халҡы өсөн Себер элек-электән хәүефле, ярайһы уҡ ҡурҡыныс тараф булып ҡала. Әле батшалар заманында уҡ Себергә Рәсәйҙең төрлө мөйөштәренән анһат юл менән байырға теләүсе башкиҫәрҙәр, кеше үлтереүселәр, ҡасҡындар, ҡараҡтар ағылып торҙо. Хәйер, Башҡортостан үҙе лә ошондай йыртҡыс килмешәктәрҙән аҙ яфа күрҙеме ни? Совет власы ла Себер киңлектәренә урман киҫергә тип тә, яңы ҡалалар, заводтар төҙөргә тип тә әллә күпме енәйәтселәрҙе алып барып тултырҙы. Әле лә аҙым һайын хәүефхәтәр тыуҙырырға һәләтле яҡ булып ҡала Себер. Дөрөҫ, унда үҙ ерендә бәхет күрә алмаған, залим түрәләрҙән эҙәрләнгән, ярлылыҡтан башы сыҡмаған, шуға ирекле һәм хәлле тормош эҙләп килгән намыҫлы кешеләр ҙә бар.

Иң беренсе сиратта ошолар хаҡында әсенеп һәм бошоноп уйланды Сынтимер.

* * *

Тәүҙә үҙе хеҙмәт иткән сағында зэктарҙы ҡарауыллаған төрмәгә барып ҡарарға булды Алмаз. Унда уны төрмә башлығынан надзирателгә тиклем яҡшы беләләр ине. Башлыҡ уны иғтибар менән тыңлағас:

— Ниндәй һөнәрҙәрең бар? — тип һораны.

— Газ һәм электр сварщигы. — Алмаздың яуабын ишеткәс, хужа йәнләнеп китте.

— Енәйәтселәр һаны беҙҙә кәмергә уйламай. Киреһенсә, артҡандан-арта ғына. Беҙҙең зона — бер бәләкәй ҡала хәтле. Тотҡондар цехтарҙа эшләй. Улар эшләй икән, тимәк, аҡса ла бар, тигән һүҙ. Инициативалы төҙөлөш ярҙамында үҙебеҙҙең материаль базабыҙҙы ла нығытабыҙ. — Башлыҡ был һүҙҙәрҙе ғорурланып әйтте. — Беҙгә тағы бер корпус төҙөргә рөхсәт иттеләр, бөгөнгө

көндә төҙөлөш бригадаһын квалификациялы эшселәр менән тулыландырабыҙ. Төҙөлөштә сварщиктар ҙа бик кәрәк. Һине бер һүҙһеҙ эшкә алам. Ятаҡтан бер бүлмә бирербеҙ. Бөгөн үк ҡатының менән балаңды ғаиләлеләр ятағына пропискаға индер. Давай, тырышып эшлә! Яйлап ҡатыныңа ла эш табылыр. Беҙҙә зонала эшләүселәрҙең балалары өсөн баҡса ла бар. Малайығыҙға ла шунда бер урын бирербеҙ...

Ул көндө Алмаз менән Заһира өсөн шатлыҡ-һөйөнөстөң сиге булманы. Алмаз дәртләнеп, киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап эшкә тотондо.

Тик оҙаҡ эшләй алманы шул Алмаз был ҡалала. Башлыҡ әйткәнсә, уға төҙөлөш объектында төрмәлә ултырыусылар менән бергә эшләргә тура килде. Төрмәнән башы сыҡмаған берәү Алмазды тиҙ таныны. Ул егеттең күптән түгел генә үҙҙәрен һаҡ аҫтында йөрөтөүен яҡшы хәтерләй ине. Төрмәлә ултырыусылар иһә милицияла, Эске эштәр министрлығы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткәндәрҙе дошман күрәләр.

Быны Алмаздың да ишеткәне бар ине. Ләкин ул быға артыҡ иғтибар итмәне. Уға, сварщик булараҡ, башҡа төҙөүселәрҙән ситтәрәк, айырым урында эшләргә тура килде. Шуныһын да иҫәпкә алған енәйәтселәр. Яңғыҙын бер бүлмәлә тотоп алдылар ҙа йыртҡыстарса туҡмарға, типкеләргә керештеләр. Егермеләп төрмәсе ябырылғайны уға. Ауыҙынан, ҡолаҡтарынан ҡан киткән Алмазды вәхшиҙәр бик оҙаҡ туҡманы. Уның ғүмере шулай фажиғәле өҙөлдө...

* * *

Тормоштоң ҡырыҫ елдәре Йыһангирға ла иртә һуғылды. Әсәһе Заһира, ире үлгәс, улын Сынтимер менән Гөлбоҫтан ҡарамағына тапшырҙы ла икенсе иргә сығып китте. Бала йәнле Амангилдиндар атаһына һуйып ҡаплаған Йыһангирҙы бер һүҙһеҙ үҙҙәренә алдылар. Ейәндәрен улар улдары Алмаздың берҙән-бер төҫө итеп күрәләр ине.

Йылдар үтте. Йыһангир олатаһы менән өләсәһе тәрбиәһендә үҫеп, егет ҡорона етте. Урта мәктәпте уңышлы тамамлағас, Өфөгә, ауыл хужалығы институтына барырға дәртләнде. Химиянан һынауҙы "өслө"гә бирҙе. Ҡесе Амангилдин уңышһыҙлыҡтың тәүге билдәһен ауыр кисерҙе һәм икенсе һынауҙы биреп тә торманы — ҡабул итеү комиссияһынан документтарын алды ла ауылына ҡайтып китте.

...Һуғыш ваҡытында ҡышҡы ҡаты һыуыҡтарҙа, йылы кейем булмағанлыҡтан, өҫтөнә йоҡа ғына кәзәкей, башына нәҙек сепрәк яулыҡ ябынып, молотилка менән ашлыҡ баҫырға эшкә йөрөгәйне Гөлбоҫтан. Шунда һыуыҡ тейҙергәйне башына. Бик оҙаҡ яфаланды ул баш һыҙлауы менән. Етмәһә, Алмазының ҡайғыһы ауырыуын тағы ла көсәйтеп ебәрҙе. Улының үлеме Сынтимерҙең дә йөрәгенә тәрән йәрәхәт һалды, уның да һаулығын ныҡ ҡаҡшатты. Шулай ҙа бирешмәҫкә тырышты. Ләкин Гөлбоҫтандың сире сигенергә теләмәне, хәле насарланғандан-насарланды. Ҡаты ауырып ятҡанында ул үҙе өсөн түгел, ә ире Сынтимер, мәктәптә уҡып йөрөгән ейәне Йыһангир өсөн ҡайғырҙы: "Үлеп китһәм, йәтим ҡалалар бит, меҫкендәр", — тип өҙгөләнде. Ошондай ауыр уйҙар ҡосағында йән бирҙе ҡатын.

Бергәләп татыу ғүмер иткән, ҡайғыһын да, шатлығын да бергә уртаҡлашҡан хәләл ефете үлеп киткәс, ныҡ ҡына олоғайһа ла, Сынтимерҙең Бишҡурайҙа йәшәргә дәрте һүнде.

Йыһангир институтҡа инә алмай ҡайтҡас, ауылды ташлап китеү теләге йөрәгендә ут булып дөрләй башланы һәм көнөн дә, төнөн дә тынғылыҡ бирмәне. Бер көндө ул ейәненә көтөлмәгән хәбәр әйтте.

— Ауылда мал аҫрауы ла ауырлашты, әллә ҡалаға күсенеп китәйек тә барайыҡмы, улым? Уразбәк ағайың янына. Ни тиһәң дә, бер туған ҡустымдың улы бит әле ул. Тел ярҙамы ла тейеп торор.

— Олатай, үҙең ҡара, һин хужа бит йортҡа, — тине Йыһангир. — Шулай ҙа тыуып-үҫкән ерҙән айырылыуы ҡыйын булыр барыбер.

— Ҡайтып торорбоҙ, йыраҡҡа китмәйбеҙ бит.

Ошо һөйләшеүҙән һуң Сынтимер ағай донъяһын туҙҙырып, йортон, мал-тыуарын һатып, Стәрлетамаҡ ҡалаһында ағас йорт һатып алды. Шунда күсенделәр.

Тап-таҙа көйө олатаһының пенсияһына ҡарап ятырға теләмәне Йыһангир, эшкә урынлашырға булды. Тәүҙә гәзиттәрҙән белдереүҙәрҙе ҡарап сыҡты. Йәштәрҙе төҙөлөшкә әйҙәүсе иғлан салынды күҙенә. Һөнәре булмаһа ла, шунда барырға булды. Кирбес, таш менән эш иткән урында ҡул көсө кәрәк булыр әле, тип уйланы ул. Егетте ташсылар бригадаһына алдылар.

Бына мастер менән Йыһангир бетон баҫҡыс буйлап икенсе ҡатта эшләүсе ташсылар янына күтәрелде. Бригадир, мастерҙың килгәнен шәйләп, үҙе уның ҡаршыһына табан ыңғайланы. Ваҡ кирбес киҫәктәре туҙышып ятҡан оҙон панелдәр өҫтөнә ышаныслы баҫып, мастер алдына урта буйлы, киң яурынлы, мыҡты кәүҙәле Шәрәф килеп баҫты. Ул ҡыҫынҡы күҙҙәре менән берсә мастерға, берсә Йыһангирға ҡарап алды.

— Тыңлайым, Фәнзил Фәрүәзович. Берәй мөһим хәбәр бармы?

— Прораб һинең бригадаға бына был егетте беркетте. Ҡабул итеп ал! Исеме — Йыһангир, фамилияһы — Амангилдин. Яңы ғына мәктәпте тамамлаған. Һинең бригадаңды кадрҙар менән нығытабыҙ инде.

Шәрәф ауыҙын ҡыйшайтып ҡарап ҡуйҙы:

— Тишек-тошоғобоҙ бөтәйеп, донъябыҙ нығынып китерме икән?

— Көлмә. Был малайҙар эштә сынығып, саҡматаш кеүек ут сығарыр егеттәр булып китер әле, күрерһең. Үҫеп китһендәр өсөн уларға иғтибар ғына етмәй.

— Ауылда эсергә өйрәнеп килмәһә ярар ҙа.

— Ул ҡайҙан эсергә өйрәнһен әле? Беҙҙең бригада эскеселәренән һаҡларға кәрәк тиһәң, дөрөҫ булыр.

— Уныһы дөрөҫ. Был егет ундайҙарға оҡшамаған да инде.

— Ярар, хәйерле сәғәттә, — тине мастер Амангилдинға ҡарап. — Ҡалғаны бригадир хөкөмөндә. Ҡара уны, һынатма!

— Рәхмәт йылы һүҙегеҙгә. Тырышырмын! — тип яуап бирҙе Йыһангир.

Шәрәф, Йыһангирҙы ҡарашы менән тағы бер тапҡыр ҡойондорғас, былай тине:

— Бында эш ауыр. Эш хаҡын талонлата түләйҙәр. Шулай ҙа хужалар яҙға табан хеҙмәт хаҡы өсөн аҡсалата түләрбеҙ, тиҙәр. Донъя былай тормаҫ, яйлап рәтләнер, тигән уйҙабыҙ. Юғиһә, аҡса бирелмәгәс, күптәр төҙөлөштә оҙаҡ эшләмәйҙәр, китәләр.

Бригадир бер эшсегә өндәште:

— Әсфир, бына һиңә напарник. Икәүләп тимер ялғаштан бадьяларға цемент иҙелмәһен тултырып торорһоғоҙ, белмәгәнен өйрәтерһең. Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

Егеттәр ҙур тимер ялғаштан буш күнәккә цемент иҙелмәһе тултырҙылар. Һауытты крандың оҙон тросына тағылған ырғаҡҡа эләктереүҙәре булды, кран йөктө өҫкә күтәреп алып менеп тә китте. Ике күнәк тултырғансы, Йыһангирҙың битенән тир бөрсөктәре атылып сыҡты.

— Тағы берҙе тултырайыҡ та, аҙ ғына ял итеп алырбыҙ, — тине Әсфир. — Юғиһә бында: “Раствор давай!” — тип әленән-әле ҡысҡыралар ҙа торалар.

Өсөнсө күнәкте тултырып оҙатҡас, егеттәр эргәләге бүрәнә тояҡлы эскәмйәгә хәл алырға ултырҙылар.

* * *

Ҡәләше Гөлбиназ менән дә төҙөлөштә таныштылар. Сәстәрен сәскә бәйләүҙәре лә ҡыҙыҡ ҡына килеп сыҡты.

Йыһангир Гөлбиназ менән өйләнешеү хаҡында һөйләшеп тә ҡарағаны юҡ. Ә олатаһы менән был хаҡта һөйләшеп, аңлашып бөттөләр.

Ҡис көнө улар паркта осраштылар. Һирәк-һаяҡ йөрөгән йәштәрҙе иҫәпкә алмағанда, кеше әллә ни күренмәй.

— Һин мине үпһәң дә була, — тип йылмайҙы Йыһангир.

— Ә ни өсөн мин һине үбергә тейешмен?

— Һиңә шатлыҡлы хәбәр алып килгәнем өсөн.

— Йә, әйт инде, ниндәй шатлыҡлы хәбәр ул?

— Юҡ, үпмәһәң — әйтмәйем.

Гөлбиназ үрелеп, егеттең ирененән һурып үбеп алды.

— Өйләнергә ҡарар иттем, һине кәләш итеп алырға уйлайым.

Ҡыҙ аптырап китте:

— Мин бит әле кейәүгә сығырға уйлағаным юҡ. Шаяртмайһыңмы?

— Юҡ, бөрлөгәнем, һис тә алдамайым. Риза булһаң, мине яратһаң, сыҡ тормошҡа. Башҡаларҙан кәм донъя көтмәбеҙ.

Ҡатын-ҡыҙ кейәүгә сығыуҙы оло бәхет итеп ҡабул итә. Гөлбиназ да был бәхеттән мәхрүм ҡалырға теләмәне. Ул Йыһангирға кейәүгә сығырға ризалыҡ бирҙе. Март айының икенсе яртыһында уларҙың туйы булды. Ҡыҙ, ятаҡ бүлмәһен ташлап, Сынтимер ағайҙарҙың иркен, яҡты йортона килен булып төштө.

Тиҙҙән уң яҡ күршеләре ҡалаға күсеп китте. Сынтимер уларҙың өйөн тиҙләтеп һатып алды. Йәш ғаилә ҡыуанып яңы йортҡа күсте.

* * *

Йәйҙең йылы көндәре килгәс, Сынтимер военкомат аша Йоматау шифаханаһына путевка алды. Табиптар уға ҡымыҙ эсергә, һауа алмаштырырға тәҡдим иткәйнеләр. Ни тиһәң дә, Стәрлегә күсеп килеү уның һаулығына кире йоғонто яһаны. Ҡалала һауа газлы, һыу хлорлы, бөтә тирә-яҡ шау-шыуға күмелгән, ҡайҙа барма — ығы-зығы. Ғүмер буйы ауылда йәшәгән кешегә был үҙгәрештәргә яраҡлашып китеүе еңелдән булманы. Хәйер, ул быға артыҡ бошонманы ла. Шөкөр, туғыҙынсы тиҫтәне аҫау айғыр итеп, ғүмеренең һикәлтәле

юлынан алға саба ла саба әле. Ә бына ҡустыһы Хәсәнгә Хоҙай ғүмер бирмәне. Теремек, шуҡ, тәүәккәл, үҙ-үҙенә ныҡ ышаныусан кеше бик йәшләй вафат булды шул. Сынтимер ҡустыһы менән бергә үткәргән йылдарҙы иҫкә төшөрөп ултырҙы.

Улар игеҙәк балалар кеүек бергә үҫтеләр. Хәсән урта мәктәпте тамамлап, ҡулына өлгөргәнлек аттестаты алғас, Ташкенттағы танк училищеһына уҡырға инде. Һуғыш алдынан уны тик “бишле” билдәләренә генә тамамланы. Экипаж командирлығына уҡыған кесе лейтенантты немец ғәскәрҙәре илгә ябырылған тәүге көндәрҙә үк һуғышҡа алалар. Башта беҙҙекеләр сигенһәләр, аҙаҡтан һуғыша-һуғыша немецтарҙың үҙҙәрен ҡыҫырыҡлайҙар. Курск дуғаһындағы иң ҙур һәм иң хәтәр танк һуғыштарында ҡатнаша Хәсән. Сәмләнеп, батырҙарса һуғыша ул.

Немецтар ҙа артҡа сигенгән һайын ҡатыраҡ ҡаршылыҡ күрһәтәләр. Ике яҡтан да үлеш-ҡырылыш дауам итә. Бөтә ерҙә — ҡан һәм дары еҫе. Һуғыш ҡырҙарындағы тыныс таңдар ышаныcһыҙ, тынлыҡ ялғанға төрөнгән. Бына һыҙылып ҡына таң ата. Беҙҙең ғәскәрҙәр Белоруссия ерендә оборона тота. Һалдаттар траншеяларға, дзот һәм доттарға, окоптарҙа ултырған танк башняларына кереп боҫҡандар. Алда — немецтар тарафынан көслө нығытылған, яҡын килә алмаҫлыҡ ҡәлғәгә әйләндерелгән ҡалаларҙың береһе.

Ҡала өҫтөн иртәнге аҡһыл томан ҡаплаған. Бына томан яйлап ҡына тарала башлай. Йоҡоһоҙлоҡтан арыған ҡыҙылармеецтар әлеге ҡала-ҡәлғәгә ҡарап-ҡарап алалар. Хәсәндең экипажы ла, башҡа танкистар кеүек, машинаһын окопҡа ҡуйған, көбәге генә сығып тора. Дошман күрмәһен өсөн Хәсән уны өҫтән маскировка япмаһы менән ҡаплатҡайны.

Гитлерсылар, совет ғәскәрҙәренә бер урында нығынырға, хәл йыйып көс тупларға ирек бирмәй, көнөнә дүртәр-бишәр тапҡыр атака яһай. Көслө нығытылған ҡәлғәне шундуҡ ҡына барып алырға көсө самалыраҡ беҙҙекеләрҙең дә. Шуға күрә Ҡыҙыл Армия көнбайышҡа алға барғанда оборона һуғыштарын да киң файҙалана. Дошмандың хәлен алыу өсөн бик кәрәкле тактик сара был. Һәр һалдат, һәр офицер, шул иҫәптән танкист-лейтенант Хәсән дә хәлде яҡшы аңлай.

Бына уларҙың дүрт кешелек экипажы, немецтар тағы ни ҡыйратырҙар икән тип, ҡоторонҡо һөжүмде кире ҡағырға әҙерләнеп, танк эсендә ултыра. Ҡем белә, дошманға ҡаршы беҙҙекеләр һөжүмгә дәррәү күтәрелерҙәр ҙә, әлеге яугирҙар, “аҫау айғыр”ҙарын дөрһөлдәтеп, алға, гитлерсылар өҫтөнә ташланырҙар. Ни тиһәң дә, бер урында ятып һуғышҡансы, танкист өсөн алға хәрәкәт итеү күңеллерәк тә, ҡыҙығыраҡ та.

Экипаж ағзалары — төрлө милләт кешеләре, һуғышҡа илдең төрлө мөйөштәренән алынғандар. Хәсәндең механигы — татар егете Билал Ғаязов — Башҡортостандан, наводчигы — яҡут Григорий Павлов — алыҫ Яҡутстандан, ә заряжающий Игорь Макаров Воронеж ҡалаһында тыуып үҫкән, рус милләтенән. Барыһы ла — тәжрибәле һалдаттар. Шулай ҙа һәр бәрелеш ҡан көҫәй. Шуғалырмы, ут-һыуҙы кискән һалдаттарҙың йөҙөндә борсолоу, хәүефләнеү билдәләре салына.

— Что-то тревожно на сердце, — тип үҙ алдына һөйләнеп ҡуйҙы Макаров.

— Ниңә хәүефләнәһең, Игорь? Воронежыңды азат иттек. Һөйгән Марусяң унда хәҙер, немецтарҙан ҡотолдоҡ тип, осоп-ҡунып йөрөйҙөр, — тине Билал.

— Еңеү байрамы килеп етмәгән әле, бына фрицты дөмөктөрәйек, шунан инде Маруся менән икәүләп бейеһәк тә була.

— Ул көндө күреп булырмы икән һуң? Мин быға ышанып та бөтмәйем әле, — тине Павлов.

— Күрербеҙ, Алла бойорһа. Ул көн шундай матур, шундай йәмле булыр. Ошо хәтле мәхшәрҙәрҙе күреп, башыбыҙҙан кисергәс, донъяның да ҡәҙерен белербеҙ, — был һүҙҙәрҙе әйткәндә Хәсәндең тауышында рухи күтәренкелек, еңеүгә булған ышаныс билдәһе яңғыраны.

— Ә һин, Гриша, һуңғы ваҡытта бошонҡо йөрөйһөң. Әллә ҡатыныңды һағындыңмы? — тип өндәште Билал.

— Ҡатынымды ла һағындым, балаларҙы ла.

Павлов һуғышҡа тиклем өйләнеп, башлы-күҙле булған ир-уҙаман.

— Һин, Билал, үҙең бер ҙә беҙгә яратҡан ҡыҙыңды һөйләгәнең юҡ. Әллә һуғышҡа тиклем ҡыҙҙар менән дә йөрөмәгәнһең инде?

— Мин кемдән кәм? Йөрөнөм. Бер ҡыҙ менән дуҫлашып, шуны яратып йөрөнөм.

— Ул ҡыҙың ҡайҙа булды?

— Ҡайҙа булһын, икенсе кешегә кейәүгә сығып китте.

— Яттар ҡулына үҙең алып барып тоттормағанһыңдыр?

— Юҡ та ул, — Билалдың был турала һөйләшергә бер ҙә теләге юҡ ине. Был юлы Гриша төпсөндө:

— Тимәк, ҡыҙың һиңә хыянат итте. Шулаймы?

— Улай тип тә әйтә алмайым.

— Ә кем ғәйепле һуң улай булғас?

— Ғәйеп атта ла, тәртәлә лә бар. Иллегә илле.

— Һин беҙгә төшөндөрөп һөйлә әле, бер нәмә лә аңламайбыҙ, — тине был юлы Макаров.

— Унынсы синыфты тамамланым. Уҡытыусы булырға дәртем ҙур ине. Документтарымды алдым да ҡалалағы ике йыллыҡ уҡытыусылар институтына барып, һынауҙар бирҙем. Имтихандарҙы юғары билдәләргә тапшырып, уҡырға индем. Мин дәртләнеп, ҡанатланып ауылға ҡайтып киттем. Был ваҡытта колхозыбыҙҙа бесән әҙерләйҙәр ине. Беҙҙең ауылдан ун саҡрым ситтә Гөмбәле тигән ауыл бар. Был ауыл урмандар менән уратып алынған, шуға унда малға ашатыр өсөн йүнләп үлән үҫмәй, бесән дә саба алмайҙар. Йәй булһа, гөмбәлеләр, колхоз уртаҡ булғас, бесән әҙерләргә беҙгә киләләр. Ауылыбыҙ Күкташ исемен йөрөтә. Эргәһендә генә йылға аға, ә йылға буйында болонлоҡтар йәйрәп ята. Сәскәләргә күмелгән туғайҙарҙа күпереп үлән үҫә.

Бесән әҙерләү — ауыр эш. Унда бөтә халыҡ: ололар ҙа, йәштәр ҙә, балалар ҙа ҡатнаша. Беҙ, йәштәр, көндөҙ эшләйбеҙ, ә төндә клубта күңел асабыҙ. Мин гармунсы инем. Тальян тартып, клуб янында йәштәрҙе бейетәм генә. Шунда күрше ауылдан килгән бер ҡыҙыҡайға күҙ төштө лә ҡуйҙы бит. Исеме Ҡәмәргөл икән. Танышып та алдым. Клубта уйын бөткәс, ары һуғылабыҙ быньң менән, бире һуғылабыҙ. Урамдарҙан үтәбеҙ, тыҡрыҡтарҙы тапайбыҙ. Ҡайҙа барһаҡ та, артынан 10—11 йәшлек ҡустыһы ҡалмай, эйәреп тик йөрөй. Мин Ҡәмәргөлдө ҡосаҡларға итәм — теге малай ҡосаҡлатмай, үбергә итәм — үптермәй. Бер-беребеҙгә яҡыная башлаһаҡ, әлеге малай икебеҙҙең араға килә лә керә бит әй. Үҙенә асыуланып та булмай, бешерлек тә түгел ен ташын. Бер көндө йәштәрҙе

бейеттем дә, тальян гармунды күкрәгемә ҡыҫып, урам буйлап өйөбөҙгә ҡайттым да киттем.

— Тимәк, һин уны ныҡлап яратмағанһың. Яратҡан булһаң, артынан сәүек эт шикелле йүгереп кенә йөрөгән булыр инең. Артабан нимәләр булып бөттө? — тине Гриша, Билал һөйләгәндәргә үҙ фекерен белдереп.

— 10-сы класта уҡып йөрөгән сағында кейәүгә сыҡты. Ә мин ҡалаға, уҡытыусылар институтына уҡырға киттем. Ике йыл белем алғас, уҡыуҙы тамамлап, үҙебеҙҙең районға уҡытырға ҡайттым. Мәктәптә бер ай ҙа эшләмәнем — армияға алдылар. Мине танк ғәскәрҙәренә хеҙмәт итергә ебәрҙеләр. Армияла өс йылдан артығыраҡ хеҙмәт иткәс, ноябрь айында демобилизацияланып, өйгә ҡайтым, — тип тамамланы һүҙен Билал.

Шул ваҡыт танк эсендә рация шытырлаған тауыш ишетелде. Бөтәһе лә баштарына шлемофон кейҙеләр. Шул минутта Хәсән взвод командирының: "Һуғышҡа әҙерләнергә!" — тигән командаһын ишетте. Триплекс аша дошмандың терәк пунктына әйләнгән ҡала яғына ҡарауы булды, унда ут көлтәләре ялт-йолт итеп ҡалды, беҙҙекеләр биләгән позиция өҫтөндә снарядтар шартларға тотондо. Окоптар, траншеялар эсендә яраланған һалдаттарҙың ыңғырашҡан тауыштары ишетелде. Совет ғәскәрҙәре лә яуапһыҙ ҡалманы — дошман өҫтөнә пушкаларҙан ут яуҙырҙылар. Бына бер ваҡыт ике яҡтан да артиллерия телгә килде. Танктарға әлегә атырға бойороҡ бирелмәгәйне. Хәсән совет яугирҙарының юлына аждаһа кеүек арҡыры ятҡан ҡала-ҡәлғәнән күҙен алманы. Ул белә: оҙаҡламай немецтар үҙҙәренең бронетехникаһын, унын артынан йәйәүле ғәскәрен һөжүмгә күтәрәсәк. Шулай булып сыҡты ла. Гөрһөлдәп ер тетрәткән артиллерия канонадаһы баҫыла төшөүгә немецтар яғынан кескәй генә "ташбаҡалар" күренде.

— Дошман танктары күренде! — тип иҫкәртте Хәсән үҙенең иптәштәрен.

— Алда — немец танктары! Һуғышҡа әҙерләнергә! — тигән команда ишетелде рация аша.

— Есть һуғышҡа әҙерләнергә! — тип яуап бирҙе Хәсән дә.

Немец танктары окоптарға яҡынлашыу менән уларға ҡаршы беҙҙҙекеләр көслө ут бөрктө. Туп-тура үҙҙәренә ҡаршы килгән "ташбаҡаларға" төбәп, Хәсәндәр бронебойный снаряд менән атып ебәрҙеләр, немец танкы сыра кеүек дөрләп янып та китте.

Хәсәндең егеттәре дошмандың тағы ла ике машинаһын сафтан сығарҙылар, пулеметтан ут яуҙырып, ярсыҡлы фугаслы снарядтар менән атып, әллә күпме йәйәүле ғәскәрҙәрен юҡ иттеләр. Немецтар сигенә башланы. Совет танктары, пехотаны эйәртеп, уларҙың артынан ҡыуа сыҡты. Ҡонтрһөжүмгә күскән совет һалдаттарына һәм офицерҙарына ҡала-ҡәлғәне яулау бурысы йөкмәтелгәйне. Ләкин артабанғы ваҡиғалар совет командованиеһының был һөжүмгә ныҡлап әҙерләнмәгәнлеген, айҙар буйы нығытылған ҡәлғәне алыуға, һалдаттарҙың ғүмерҙәрен һаҡлауға үтә еңел ҡарағанлығын күрһәтте.

Дошман ҡәлғәгә килә торған юлдарға мина кәртәләре ҡуйған икән. Ғөмүмән, тирә-яҡ алдан уҡ мина яландары менән уратып алынған булған. Шул миналарға эләгеп, бер юлы өс танк шартлап сафтан сыға. Хәсәндәрҙеке лә була шулар араһында. Ҡөслө шартлауҙан машинаны ут солғап ала, бер кем дә сыға алмай. Экипаждың дүрт ағзаһы ла, шул иҫәптән Хәсән дә, танк эсендә янып үлә...

Совет яугирҙары ҡала-ҡәлғәгә яҡынлаша башлағас, немецтар, нығытмалар артына ышыҡланып, улар өҫтөнә бөтә төр ҡоралдарҙан ут асалар. Тағы ла бер нисә совет танкы яндырыла. Беҙҙең пехотаны гитлерсылар, уңайлы позициянан файҙаланып, түшәп һалалар. Иҫән ҡалған бер нисә танк һәм бик аҙ пехота менән совет һалдаттары үҙҙәренең позицияларына сигенергә мәжбүр була.

* * *

Хәсәндең үле хәбәрен ишетеп, Ғәлиәкбәр менән Гөлзифаның башына ҡара ҡайғы төштө. Улар өсөн тормоштоң аҫты-өҫкә килеп, донъя селпәрәмә килгәндәй тойолдо. Бигерәк тә, атай кеше булараҡ, Ғәлиәкбәр ныҡ ҡайғырҙы. Ул кесе улын олоһона ҡарағанда ла нығыраҡ ярата ине. Етмәһә, Хәсән атаһына ныҡ оҡшағайны. Толҡа тапмай, яландарға сығып, моңло йырҙар көйләп йөрөнө. Урманға барһа, һағыш тулы тауышы менән: “Хәсән улым, ҡайт!” — тип ҡысҡыра торғайны. Ә тауыш, шаңдау булып, бөтә урманды яңғырата. Шулай хәсрәте бүҫкәргәндәй, янған йөрәгенең уты кәмегәндәй була. Был ваҡытта Сынтимер фронтта ине. Ҡесе улының үлеменә бәйле ҡайғы-хәсрәттәр Ғәлиәкбәрҙе ныҡ ҡаҡшатты — тиҙҙән ул донъя ҡуйҙы.

...Сынтимер һуғыштан ҡайтып, 40 йыл үткәс, уны военкоматҡа саҡырттылар. Военком унан: “Сынтимер Ғәлиәкбәрович, һинең Хәсән тигән ҡустың бар инеме?” — тип һораны. Был һорауҙан өлкән Амангилдин, башы әйләнә биреп, саҡ ҡолап китмәне. Әллә тереме ҡустыһы?

— Ҡустығыҙ Хәсән Амангилдинға үлгәндән һуң Дан ордены бирелгән булған. Орден 40 йыл буйы Оборона Министрлығының архивында ятҡан. Ниңә геройҙың ата-әсәһенә тапшырылмағандыр — белмәйем. Һуңлап булһа ла, батырҙың туғандарына аманатты ебәрергә ҡарар иткәндәр, шуны Һеҙгә тапшырам, — тине военком.

— Рәхмәт Һеҙгә, иптәш майор! Ҡустым батыр һуғышҡанын белдем, тик иҫбатлай ғына алмай инем, — тине Сынтимер. Был минутта уның йәшле күҙҙәрендә ҡустыһы өсөн ғорурланыу һәм һағыш тойғоһон күрергә мөмкин ине.

* * *

Бер көн эштән ҡайтыу менән Гөлбиназ иренең ҡулына повестка тотторҙо. Үҙенең күҙҙәре йәшкә төйөлгән. Тыуған ил алдындағы бурысты үтәмәй сара юҡ — ауырлы ҡатынын, олатаһын ҡалдырып, военкоматҡа йүнәлде Йыһангир.

...Егеттәрҙе тейәгән өс автобус Өфөгә табан иртән иртүк сығып киткәйне. Ер өҫтөнә йоҡа көпшәк ҡар яуған. Туң һәм тайғаҡ юлдан яй ғына барған машиналар буласаҡ һалдаттарҙы баш ҡалаға төш ваҡытындараҡ килтереп еткерҙе. Йыйылыу пункты ҡорт иләүе кеүек мыжғый. Йыһангирҙарҙы сафҡа теҙеп, әлеге йорттоң бер ҡанатына медкомиссия үтергә алып киттеләр.

Ҡомиссия үткәс, йыйылыу пунктының казармаларына әйләнеп ҡайттылар. Амангилдин ваҡытлыса төҙөлгән үҙ ротаһының егеттәре урынлашҡан урынға килде. Ул ике ҡатлы һәндерәнең өҫкөһөнә урынлашты. Зәңгәр курткаһын бөкләп, баш аҫтына һалды ла таҡта өҫтөнә һуҙылып ятты. Рюкзагын эргәһенә ҡуйҙы. Шунда ғына уны яҡын кешеләрен юҡһыныу тойғоһо биләп алды. Яманһыу булып китте. Ҡатынының ут йотоп тороуын хәтерләп, тәненә һалҡын тир бәреп сыҡты, күҙҙәренә йәш эркелде. “Ҡәрәге тейер, барғас та миңә хат яҙырһың”,

— тип Гөлбиназ унының биштәренә дәфтәр, ручка һәм конверттар һалғайны. Ул шуларҙы тартып сығарҙы ла, дәфтәрен һәндерә таҡтаһына һалып, Гөлбиназға хат яҙа башланы. Иң башта кәләшенә, шунан олатаһына күп сәләмдәр теҙҙе, тыуған йорттан алыҫта үткәргән тәүге көн тәьҫораттарынан унының күңел төбөнән һағышлы һәм ҡайнар хистәр бәреп сыҡты.

"...Һине юҡһыныуҙан, айырылышыуҙан сыҡҡан йөрәк һыҙлауын тел менән аңлатып бирерлек түгел. Мин һине шул тиклем яратам. Беләм, һин дә мине һөйәһең. Шул һөйөүеңде ташлама, һандуғасым. Тиҙҙән беҙҙе хәрби часҡа алып китәсәктәр, барып еткәс тә тағы яҙырмын. Хуш, Гөлбиназым! Һине үбеп, Йыһангирың".

Эшен теүәлләгәс, хатты тышта торған почта йәшнигенә һалырға уйланы. Ҡазарма алдындағы майҙанда ул көтмәгәндә ауылдашы Хәбирҙе осратты. Йыһангир менән Хәбир Бишҡурай ауылында мәктәпте бергә тамамлағайнылар. Хәбир бәләкәйҙән физкультура дәрестәрен яратты. Спорт менән мауығыу уны физкультура техникумына алып килде. Икенсе курсҡа күскәс, оҙон буйлы, һарғылт сәсле, зәңгәр күҙле Хәбирҙе хәрби хеҙмәткә алдылар.

Хәбир — татар егете. Бишҡурай ауылында башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа бергә көн күрә. Үҙ-ара ҡоҙа-ҡоҙағый булышып, ҡайғыһын да, шатлығын да бергә кисереп, туғанлашып йәшәйҙәр улар. Беренсе булып Хәбир танsocialны ауылдашын.

— Йыһангир, кемде эҙләп йөрөйһөң? Мин бында! — тип яңғыраны таныш тауыш. Егет тауыш ишетелгән яҡҡа ҡараны һәм яҡында ғына йылмайып торған дуҫын күрҙе. Йыһангир район үҙәгенә күсенеп киткәндән һуң улар байтаҡ ваҡыт күрешмәгәйне.

— Һин дә бында килеп эләктеңме ни, Хәбир дуҫ? — тип ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ул.

— Эләктерҙеләр, уҡып бөткәнде лә көтөп торманылар. Армияның тишек-тошоғо күбәйгән, ти бит. Шуны ҡапларға кеше етмәй, тиҙәр.

Улар бер-береһе менән ҡосаҡлашып күрештеләр.

— Рюкзак аҫҡанһың, әллә яңы килдегеҙме? — тип һораны Амангилдин Хәбирҙән.

— Ташлытауҙан һуң сыҡтыҡ. Унда бит митинг яһап, тамаҡ йыртырға яраталар. Егеттәрҙе хеҙмәткә оҙатыу тантанаһы ойоштороған булып, ярлы-ялпы балаларын, ялҡынлы телмәрҙәр тотоп, армияға оҙаттылар.

— Әйҙә инәйек, минең яндан урын алырһың, — тип тәҡдим яһаны дуҫына Йыһангир. Улар казармаға инделәр. Хәбир һәндерәлә Йыһангир эргәһенән урын алғас, оҙаҡ ҡына һөйләшеп яттылар.

* * *

...Ейәнен һалдатҡа оҙатҡас, Сынтимер ағайҙың ҡулына эш барманы. Күҙлеген кейеп, гәзит уҡырға ла тырышып ҡараны. Әммә башына бер ни ҙә инмәне. Телевизорҙы ҡабыҙҙы. Ул да ҡарттың күңелен биләй алманы. Бәғер итен ниндәйҙер хәүеф, тынысһыҙлыҡ бер туҡтауһыҙ ашап торҙо. Һағыш уты ҡартты тотошлайы менән солғап алғайны. Унының күҙҙәре тәҙрә төбөндәге алһыу сәскә атҡан яран гөлөнә төштө. Үҙе нескә, үҙе хәлһеҙ ошо сәскәне ҡыҙғаныу тойғоһо биләп алды күңелен. Саҡ ҡына тупаҫ итеп һуғылыу ҙа уны имгәтергә, һәләк итергә мөмкин. Ҡавказда үҙ ерендә азатлыҡ һуғышы алып барған чечендарға ҡаршы

көсләп һуғышҡа ебәрелгән йәп-йәш малайҙар ҙа ошо сәскәләрҙе хәтерләтмәйме ни? Күпме Башҡортостан егеттәре башын һалды был ғәҙел булмаған һуғышта. Ошоларҙы уйлап, Сынтимер ағайҙың йөрәге йышыраҡ типте, ҡан баҫымы юғары күтәрелде. Хатта ҡоро һөйәккә ҡалып барған аяҡ-ҡулдары ла нығыраҡ һыҙлай башланы. Ул, белгән доғаларын уҡып, Хоҙайҙан ейәненең хәрби хеҙмәттән иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуын теләне. “Бер улымды юғалттым, икенсе улымды ла үлтермә инде”, — тип ялбарҙы ул Раббыһынан.

Ошо ыңғай менән Сынтимер ағай йәшлеген, һуғыштың утлы яландарын хәтерләне. Бәләкәйҙән ул Алланың барлығына ышанды һәм уға һыйынып йәшәне. Һуғышта ла ул Хоҙайҙы бер генә минутҡа ла иҫенән сығарманы. Ҡурҡыныс атакаға күтәрелер алдынан йәиһә ябырылып килгән көслө дошман яҡынайғанда Сынтимер винтовкаһын ергә һала ла тубыҡланып окоп төбөнә ултыра. Ике ҡулын күккә һуҙып, хәүеф-хәтәрҙән һаҡлай торған доғаларын ҡысҡырып уҡырға, тәкбир әйтергә керешә. Был ваҡытта бөтә рота яугирҙары тауыш-тынһыҙ ғына уның Хоҙайҙан ялбарып үтенеүен тыңлар ине.

— Йә, Раббым, дошмандарыбыҙҙы ҡыйратырға көс-ҡөҙрәт һәм ғәйрәт бир! Эй, Хоҙайым, мине һәм иптәштәремде үлемдән ҡурсала, беҙҙе көткән ата-әсәләребеҙ, балаларыбыҙ, ҡатындарыбыҙ хаҡына һәммәбеҙҙе иҫән ҡалдыр, ҡурҡыныстан ҡотолорға, уны еңеп сығырға ярҙам ит! Ҡәһәрле дошман тыуҙырған йәһәннәм утында һәләк булырға дусар итмә, һәр беребеҙҙе үлемдән һаҡла, сит-ят тупраҡҡа баштарыбыҙҙы һалырға яҙмаһын. Дошмандарға ҡыйралыш килтер. Беҙҙекеләргә еңеү алып кил! Аллаһы әкбәр!

Тәкбирен, бәләләрҙән һаҡлай торған доғаларын әйтеп бөткәс, винтовкаһын ҡулына алып, башҡалар менән бергә немецтарға ҡаршы атакаға күтәрелер ине Амангилдин. Ә инде ни сәбәптәндер ғибәҙәт ҡылыуын кисектерһә йәки онотоп ебәрһә, окоптарҙағы бөтә һалдаттар, командирҙар уға:

— Сынтимер, быстро молись своему богу! — ти торғайны.

Ҡаты һуғыштар менән Сынтимер Берлинға тиклем барып етте. Унда, дошмандың өңөндә, ҡаты алыштарҙың береһендә ауыр яраланды — тәненә бер юлы ике снаряд ярсығы инеп ултырҙы. Шуларҙың береһе — уң аяғының сирағына, икенсеһе ҡулына тейҙе. Ҡулына тейгән ярсыҡ усын, бармаҡтарын ныҡ йәрәхәтләп, йырғыслап бөткәйне. Ҡаны күп аҡҡан яугирҙы госпиталгә һалдылар, ҡан ҡойҙолар. Әллә килешмәне, төндә һаташып, үҙен стенаға алып бәрә башланы. Уны карауатҡа бәйләп һалдылар. Таңға тынысланды, бәйҙәрен ысҡындырҙылар. Әммә яралы ҡулы ныҡ ҡына шешеп киткәйне. Табиптар:

— Ҡулың шешкән, киҫеп ташлайыҡ! — тип тәҡдим итте.

Сынтимер риза булманы, ҡулын киҫтермәне. Шеше тиҙҙән ҡайтты, алған яралары уңалды. Ә шулай ҙа нығ имгәнгән ҡулының бармаҡтары әйбер тоторға һәләтен юғалтып, ҡатып ҡалды. Ул II төркөм инвалиды булып ҡалды. Ғәрип булһа ла, иң мөһиме — тыуған ауылына иҫән-һау әйләнеп ҡайтты һуғыштан. Уның менән бергә һуғышҡан байтаҡ ир-егеттәр ҙә иҫән ҡалды. “Хоҙай Тәғәлә тыуҙырған мөғжизә, уның оло ярҙамы арҡаһында ғына иҫән ҡалдыҡ”, — тип иҫәпләй яугир бөгөнгө көндә лә.

Уйлап ҡараһаң, күпме ҡурҡыныс минуттар, сәғәттәр кисерелгән...

1943 йылдың октябрендә Амангилдин хеҙмәт иткән штраф батальоны башҡа частар менән бергә төндә Воронеж йылғаһын кисеп, арғы яҡ ярға килеп сыҡты. Йылғаны боҙ ҡаплай башлағайны. Ҡыҙылармеецтар уны ватып-емереп,

йылғаның көнбайыш ярына барып сыҡтылар ҙа, ул тирәнән немецтарҙы ҡыуып ебәрҙеләр һәм уларҙың окоптарына, траншеяларына инеп урынлаштылар. Еүешләнгән һалдаттар яңы урында төн буйы өшөп-ҡалтырап сыҡты. Ут яғырға рөхсәт итмәйҙәр. Ҡемдер усаҡ яғып ҡараһа, уны немецтар ҙа, үҙебеҙҙекеләр ҙә миномет уты менән ҡаплай ҙа ҡуялар. Төндө шулай туңып-ҡалтырап үткәреп ебәрҙеләр. Таң атты. Донъя яҡтыра башлағас, көнбайышта, ун саҡрымдар самаһы алыҫлыҡта, тау һырттары күренде.

— Күрәһеңме, алда тауҙар ята? — тип һораны Сынтимерҙән окобында бөршәйеп, тубыҡ бөкләп ултырған Ильяс Билимханов тигән чечен егете.

— Немецтар, көс туплап, беҙҙе шунда көтөп торалар ҙыр әле, — тине уға Амангилдин һәм уйсан күҙҙәрен күңелдәргә шом һалып көмөрәйеп ятҡан тауҙарға төбәне.

— Иң тәүҙә шунда беҙҙе, смертниктарҙы, ебәрерҙәр инде.

— Беҙҙе ебәрмәй, кемде ебәрһендәр. Иң ҡурҡыныс урындарҙың ҡаймағын башта һинең менән миңә эсерәләр. Йәм-йәшел тимер сеүәтәләр эсенә тултырылған ҡаймаҡты ҡайҙа һемерәсәкһең, беләһеңме?! Дошман янына барып етәрәк ҡаҡ яланда. Ул сеүәтәләрҙе итальян миналары тип йөрөтәләр.

Билимхановтың штраф батальонына килеп эләгеүенә бер нисә көн генә. Ә Сынтимер, бында оҙаҡ хеҙмәт иткәнлектән, “бабай” тигән ҡушамат алған.

— Мин, элекке танкист булараҡ, танкка ҡаршы яһалған миналарҙы яҡшы беләм. Быларын бит пехотаға ҡаршы ҡулланалар, тип һөйләйҙәр. Уларҙы белмәйем.

— Өҫтөнә барып баҫһаң — яҡшы белерһең. Тик баҫырға тырышма, аяҡ аҫтыңды ҡарап бар. Ундай мина шартлап китһә, эсенән зыр әйләнеп торған үткер тешле дискылар килеп сыға ла кешене тураҡлайҙар.

— Ай-бай! — тип аптырап, телен шартлатты чечен егете.

— Ә һин бында нисек килеп эләктең? Быға тиклем ҡайҙа хеҙмәт иткәйнең? — тип һораны Сынтимер Ильястан.

— Курск дуғаһында һуғышҡайныҡ. Бик ҡаты алыштар булып, немецтарҙың танк ғәскәрҙәрен шунда ҡыйраттыҡ. Мин экипаж командиры инем. Экипаж башлыса Урта Азия һәм Ҡаҙағстан егеттәренән төҙөлгәйне. Механик — ҡаҙаҡ егете Сапаров, һуғыштың тәүге көнөнән үк фронтта булды. Наводчик — Ибраһимов, ҡарағалпаҡ егете, оҫта атыусы һәм тоҫҡаусы, тәжрибәле яугир, заряжающий — Джураев, Үзбәкстандан алынғайны һуғышҡа. Курск эргәһендә немецтар ҙур һабаҡ алһалар ҙа, ҡаты һуғыштар һаман да дауам итте. Беҙ йыш ҡына танктар менән пехотаға ярҙам итә торғайныҡ, улар менән бергәләп атакаларға барҙыҡ. Бер ваҡыт беҙҙең танк взводын ҡамауға эләккән пехота полкына ярҙамға ебәрҙеләр. Беҙ, дүрт танк, ҙур юлдан бер нисә саҡрым марш-бросок менән барғас, рота командиры алдағы бурысты һәм ут позицияларын билдәләне һәм минең экипажға уң яҡҡа грунт юлы менән китергә ҡушты. Ҡалған танктар үҙ юлдары менән төрлөһө төрлө яҡҡа киттеләр. Бер аҙ барғас, көтмәгәндә беҙгә ҡаршы йөк машинаһы килеп сыҡты һәм юл уртаһынан туп-тура беҙгә килә башланы. Механик-водитель Сапаров машинаны уң яҡҡа, юл ситенә тартты. Полуторка ла ҡапыл уңға боролдо. Ул бик шәп килә ине, шуға тейешле арауыҡ ҡалдырып тайпылып өлгөрә алманы — килеп бәрелде. Машиналарының алғы крылоһы йәмшәйҙе, һул фараһы ватылып, селперәмә килде. Мин Сапаровҡа туҡтарға ҡуштым. Тегеләр ҙә туҡтаны. Полуторкаға әллә ни ҙур зыян килмәһә лә, үҙебеҙ

ашығыс задание менән китеп барһаҡ та, туҡтарға булдыҡ. Бына бер ваҡыт әзмәүерҙәй офицерҙар пәйҙә булды, үҙҙәре иҫерек. Ғауға күтәрҙеләр, һүгенергә тотондолар, тауыштарын күтәреп беҙгә екерә башланылар. “Бынау мазутчиктар ни өсөн беҙҙе кәмһетергә булдылар әле?” — тине бер йыуан майор.

Күп эсеүҙән күҙҙәре тона башлаған ҡыҙыл танаулы полковниктың күҙҙәре аларып китте: “Кто командир экипажа?” — тип ҡысҡырҙы ул ҡарлыҡҡан тауыш менән. “Мин!” — тип яуап бирҙем. “Выйти к машине!” — тип бойорҙо ул миңә.

Мин командир люгынан башты сығарып, полковникка: “Беҙ беребеҙ ҙә машинанан сыҡмайбыҙ. Сөнки һеҙ иҫерек. Шуның арҡаһында машинағыҙ менән идара итә алмай, беҙҙең танкка бәрелдегеҙ!” — тип ҡысҡырҙым.

Шул ваҡыт әлеге һонтор подполковник, асыҡ торған механик люгы аша Сапаровҡа ҡарап, әсе тауыш менән сыйнап ебәрҙе: “Ә-ә, черномазый, дала ҡомағы, һин төкәттеңме ни беҙҙең машинаны?” Беҙ күҙ асып йоморға ла өлгөрмәнек, ул кобураһынан пистолетын сығарып, механик-водителдең башына терәп атты. Шунан һуң йүгереп барып машинаға инеп ултырҙы. Башҡалар ҙа, енәйәт урынынан ашығыс рәүештә ҡасып ҡотолорға теләп, машиналарына тейәлделәр һәм китеп барҙылар. Арттарынан саң ғына осоп ҡалды. “Иптәш командир, улар Сапаровты үлтерҙеләр!” — тип ҡысҡырҙы миңә наводчик. Мин уға тиҙ генә башняны артҡа борорға һәм полуторкаға төбәп атырға ҡуштым. Теге хәсистәр бына-бына күҙҙән юғалырға тора. Бер ваҡыт пушканан атҡан тауыш гөрһөлдәне, тирә-яҡты төтөн ҡапланы. Бер аҙҙан күрәбеҙ — машиналарынан төтәп ятҡан тимер-томор өйөмө генә ҡалған...

Мин ошо хәл тураһында рация аша рота командирына хәбәр иттем. Ул, бер нимәгә ҡарамай, йөкмәтелгән бурысты үтәп сығырға ҡушты. Механик-водитель урынына үҙем ултырҙым. Беҙҙең экипаж заданиены намыҫ менән башҡарҙы. Әлбиттә, баяғы ЧП буйынса беҙҙе тикшерҙеләр. Тегеләр армия штабының юғары офицерҙары икән. Экспертиза уларҙың иҫерек булыуын билдәләгән, ҡайһыларының кеҫәләрендә спирт тултырылған шешәләр тапҡандар. Бер урында ҡамау эсендә ҡалған пехота полкы ҡанһырап, дошман менән үлемесле һуғыш алып бара, икенсе урында шул полкты ҡотҡарып ҡалыу өсөн бөтәһен дә эшләргә тейешле штаб офицерҙары эсеп, теттереп, күңел асып йөрөйҙәр. Шуны иҫәпкә алғандарҙыр, юғиһә мине, командир булараҡ, хәрби трибунал атырға уйлағайны. Барып сыҡманы. Шулай ҙа штраф батальонына ебәрҙеләр. Ә минең наводчик менән пушка ҡороусыны пехотаға күсерҙеләр...

Билимханов тынып ҡалды. Ләкин тынлыҡ оҙаҡҡа барманы. Бер нисә минуттан батальон алдағы тауҙарҙы көслө терәк пунктына әйләндергән дошманға ҡаршы атакаға күтәрелде. Пушканан атҡан тоноҡ гөрһөлдәү тауыштары ишетелде. Батальон өҫтөндә снарядтар шартлай башланы, үлеүселәр һәм яраланыусылар күренде. Амангилдин эргәһендә килгән Ильяс:

— Ниңә немецтың пушкаларына ҡаршы беҙҙең пушкалар яуап бирмәй? — тине.

— Беҙҙекеләргә һинең менән мин йәл түгел. Уларға снарядтар, бомбалар, патрондар йәл. Ана, дошман үҙ пехотаһын нисек ярһып яҡлаша. Пушкалары гөрһөлдәтеп атып ята. Ә беҙҙе яҡлашырға пушка ла, танк та, самолет та юҡ. Немецтың һәр һалдаты автомат менән ҡоралланған. Ә беҙгә батша заманынан ҡалған оҙон штыклы, эшкинмәгән винтовка бирҙеләр. Батальонда 15-ләп

һалдаттың винтовкаһы юҡ. Уларҙы ҡоро ҡул менән һуғышҡа индереп ебәрҙеләр. Кем үлә, шуның винтовкаһын алып, атырға тейеш улар. Патрондар ҙа йүнле түгел. Береһе ата, икенсеһе осечка бирә. Сөнки Нух заманынан бирле еүеш складтарҙа дымланып ятҡандар.

Батальон бата-сума әле туңырға ла уйламаған Воронеж йылғаһының һаҙлыҡлы киң туғайы аша үтте. Шуға тиклем бер кем дә винтовканан атманы. Пулялар аҙ, һәр кем уларҙы дошман менән буласаҡ алыштың иң хәтәр мәлендә генә файҙаланырға теләй ине. Етмәһә, немецҡа тейҙереүҙән бигерәк, ҡурҡытыу өсөн генә атырға тейештәр. Улар бурһыҡтар өше йәшеренгәндәр ҙә оҫта маскировкаланған окоптар, траншеялар, доттар, дзоттар эсендә беҙҙең яугирҙарҙың яҡынырак килеүен көтөп яталар. Немецтың төп оборона һыҙығы ла шул тауҙар аша уҙа. Батальон немецтарҙың артиллерия уты аҫтында туғайҙы үтеп, тигеҙлеккә — ҡола яланға килеп сыҡты. Ҡасандыр бында баҫыу булған, күрәһең. Хәҙер ул ҡалдау ергә әүерелеп, үлән һабаҡтары әле лә һирәк-мирәк һерәйешеп ултыралар. Батальон уң һәм һул флангыларын оҙонайтты һәм киң фронт менән алға табан китте. Ҡарағура яланы миналанған булып сыҡты.

Бына батальон яугирҙары дошманға яҡынлашты. Гитлерсылар бөтә төр ҡоралдарҙан совет һалдаттарына ҡаршы көслө ут яуҙыра. Алғы яҡта яландың һерәйешеп ултырған кипкән үләндәрен киҫтереп, пулеметтар таҡылданы. Беҙҙең ғәскәрҙәр көтмәгәндә ҡупҡан ғәрәсәт утынан ергә һыйынып яттылар. Әммә бер урында ятыу — үлемгә тиң. Сигенеү хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Сигенеүсе штрафниктарҙы үҙебеҙҙекеләр ҡыраcаҡ. Юғарыла, тау башында нығынып алған ҡоралы дошманға ҡола яланда ятҡан ҡыҙылармеецтарҙы ҡырып бөтөрөү бер ни ҙә түгел. Ваҡыт үткән һайын беҙҙекеләрҙән үлеүселәр һаны күбәйҙе. Һалдаттарға ышыкланып килгән командирҙар ҙа, комиссарҙар ҙа, дошман утынан ҡурҡып, алға барырға теләмәйҙәр. Ә үҙҙәре бер туҡтауһыҙ: “Батальон, вперёд, в атаку!” — тип ҡысҡырып яталар. Бер генә һалдаттың тороп алға ҡуҙғалыуы кәрәк. Шул саҡта бөтәһе лә күтәреләсәк һәм дошманға ябырыласаҡ. “Барыбер был һуғышта иҫән ҡалып булмаҫ. Әллә һикереп тороп, алға ташланайым да ҡуяйыммы икән? Үлһәм, исмаһам, батырҙар үлеме менән үлде, тиерҙәр”, — тигән көсөргәнешле уйҙар йүгерҙе Амангилдиндың башынан. Сынтимер Хоҙайға һыйынып, төрлө доғаларын уҡыны ла, ғүмерен Аллаға тапшырып, ятҡан урынынан һикереп торҙо. Уң ҡулы менән винтовкаһын өҫкә күтәреп, баш осонда болғаны ла:

— Батальон, за Родину! За Сталина! Вперед! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Көслө тауыш йәшен тиҙлегендә тирә-яҡҡа яңғыраны. Ул яҡындағы тауҙарға бәрелеп, шаңдау булып, кире ҡаҡлыҡты. Сынтимер, уҡ шикелле атылып, дошманға ҡаршы йүгерҙе. Уның һикереп торғанын күреп, Билимханов та аяғүрә баҫты һәм алға ташланды. Был күренеш ерҙә ятҡан һалдаттарға көслө йоғонто яһаны. Улар ҙа берәм-берәм ҡалҡынып, алға йүгерә башланы. Кемдер “Ура!” ҡысҡырҙы. Уны башҡалар эләктереп алды һәм, күп тә үтмәй, шарт та шорт винтовкаларҙан атып, батальон дошман өҫтөнә ябырылды.

Ярай әле, яугирҙарҙа гранаталар булған. Бына бер ваҡыт немец позицияларына табан гранаталар осто. Был гитлерсыларҙы дер һелкетте. Уларҙың ут нөктәләре кәмей төштө. Шунан файҙаланып, батальон немец траншеяларына яҡынлашты.

— Һиңә, рядовой Амангилдин, күрһәткән батырлығың өсөн командование исеменән ҙур рәхмәт белдерәм, — тине аҙаҡтан Сынтимергә батальон командиры подполковник Вуколов. — Әгәр ҙә юғарынан төшкән бойороҡто үтәмәй, алға ҡуйылған яуаплы бурысты атҡарып сығыуҙан баш тартһаҡ, бик күп һалдат һәм офицерҙар баштары менән яуап бирер ине. Һин беҙҙе һәләкәттән ҡотҡарҙың. Батырлығың күкрәге менән амбразура ҡаплаған яугирҙың батырлығына тиң. Әгәр ҙә штрафник булмаһаң, һиңә һис шикһеҙ Советтар Союзы Геройы исемен бирерҙәр ине. Шулай ҙа Ҡыҙыл Байраҡ орденына тәҡдим итәсәкмен...

* * *

Йыһангирҙы бер төркөм егеттәр менән Өфө тимер юл вокзалынан көнбайышҡа оҙаттылар. Призывниктарҙы алдан төҙөлгән командаларға бүлеп, төрлө урындарға хеҙмәт итергә ебәрҙеләр. Йыһангирҙар Һамарҙан йыраҡ түгел урынлашҡан хәрби гарнизонға юл тотто. Унда Рәсәй хәрби һауа көстәренең үҙәк спорт клубын хеҙмәтләндереүсе һәм тәьмин итеүсе хәрби база урынлашҡан икән.

... — Салага! Минең ята торған урынды йоҡларға әҙерлә!

Бер йәш һалдат йүгереп килеп, Легкоступ фамилиялы “бабай”ҙың карауатынан одеялын күтәреп, йоҡлаусының аяҡ осона шылдырҙы. Амангилдин да ефрейтор Ушаков менән Чилдиновтың түшәктәрен әҙерләне. Унан тыш, йәш һалдаттар шефлыҡҡа алыусыларҙың итектәрен таҙарттылар.

Ушаков Йыһангирҙың эшен оҡшатманы:

— Итектәрҙе щеткалағандан һуң улар ялтырап торорға тейеш, ниңә нығыраҡ ышҡымайһың, салага?

— А ну-ка, минең аяҡтарҙы йыуығыҙ! — был бойороҡ Легкоступ тарафынан әйтелде.

Алексеев, Амангилдин, Борисов өсәүләшеп ялан аяҡ карауат өҫтөндә ултырған “бабай” эргәһенә килделәр.

— Беләһегеҙме нимә эшләргә? — тип һораны ул йәш һалдаттарҙан күпте белгән ҡиәфәттә.

— Юҡ, белмәйбеҙ, — тинеләр тегеләр өсөһө бер юлы.

— Берегеҙ мине өҫтөнә ултыртып, йыуыныу бүлмәһенә алып бара. Икенсегеҙ аяҡтарҙы йыуа һәм таҫтамал менән һөртә, өсөнсөгөҙ ҡолатмаҫ өсөн тотоп тора.

Легкоступ Амангилдинға бармағы менән төрттө:

— Һин былар араһында көслөрәк күренәһең. Әйлән арҡаң менән.

Әйләнеүе булды, теге ике ҡулы менән Йыһангирҙың муйынынан быуып тотоп, арҡаһына менеп тә аҫылынды. Әйтерһең, ауыр ҡапсыҡ һалдылар. Бына ул ауыр йөктө күтәреп, ҡушылған ергә китте. Алексеев Легкоступтың аҫҡа һалынып торған яланғас аяҡтарын бөкләгәс, уларҙы өҫкә табан күтәреп, ике ҡулы менән тотоп барҙы.

Йыуыныу бүлмәһенең бер краны эргәһенә килеп туҡтау менән Борисов “ғали йәнәптәренең” яланғас аяҡтарын һабынлап йыуырға кереште. Бер аҙ йыуғас, “бабай” уға екеренергә тотондо:

— Етәр, салага, ниңә күп ышҡыйһың? Өшөтәһең бит.

Аяҡтарын таҫтамал менән ҡоротоп һөрткәс, Легкоступ Амангилдинға әмер бирҙе:

— Һин, басурман, давай тиҙерәк ҡайтыу яғына йүгер. Юғиһә ҡулдар арыны һинең муйыныңа аҫылынып.

Ә был ваҡытта Йыһангир, муйыны быуылып, саҡ-саҡ тын ала ине. Өсәүләшеп “ҡарт”ты карауатына килтереп һалыу менән мөйөштә ятҡан Петухов фамилиялы “сүмес” быларға ҡысҡырып ебәрҙе:

— Тройка, минең дә аяҡты йыуығыҙ!

Әлеге өсәү уның эргәһенә яй ғына атлап киттеләр.

— Шире шаг! Нимә быуаҙ ҡатындар кеүек атлап киләһегеҙ? Амангилдин, әйлән!

Йыһангир быға риза булманы:

— Әле генә Легкоступ йыуыныу бүлмәһенә миңә атланып барҙы. Хәҙер Алексеев менән Борисовтың сираты.

— Һин нимә, салага? Мине тыңламаҫҡа итәһеңме әллә? Хәҙер тыңлатабыҙ!

Петухов карауатынан төшөп, уң аяғы менән ике тапҡыр Йыһангирҙың эсенә типте. Шул ыңғайҙан йоҙроғо менән күкрәгенә һуҡты. Ләкин Амангилдин ҡымшанманы. Петухов тағы бер тапҡыр ҡундырып алды.

Шул ваҡыт хәрби хеҙмәткә Ҡавказдан алынған, милләте буйынса абазинец Рөстәм Мхце Петуховҡа екерҙе:

— Амангилдин һеҙгә ишәкме ни һәр берегеҙҙе ташырға! Һин, Петухов, беҙҙең һымаҡ “бабай” түгел, “сүмес”кә яңы аяҡ баҫҡанһың. Барин һымаҡ ҡыланаһың. Бына мин, “бабай”, аяҡтарымды кешенән йыуҙырғаным юҡ. Бар, үҙең йыу! Хәҙер мейеңде сәсрәтәм! Ҡөсө еткәнгә — көсөктәй, етмәһә, кеше туҡмарға керешкән, сволочь!

Петухов асыулы күҙҙәрен һирпеп, Амангилдинға тағы бер ҡараны ла шым ғына сығып китте. Башҡалар ҙа Йыһангирға бер һүҙ ҙә өндәшмәнеләр, сөнки Рөстәмдән шөрләйҙәр. Быға былтырғы бер ваҡиға сәбәпсе булғандыр, моғайын.

Спорт майҙанында волейбол уйнайҙар. Уйнаусылар араһында оҙон буйлы, мыҡты кәүҙәле Рөстәм дә бар. Уның һәр бер хәрәкәтенә бәйләнеп, Ҡудряшов фамилиялы берәү аҙым һайын кавказлыны һүҙ менән хурларға, кәмһетергә тырыша. Уйын барышында Рөстәм бәләкәй генә хата ебәрә. Ҡудряшовҡа шул етә ҡала. Ул кавказлыны: “Черномазый!” — тип һүгергә тотона. Рөстәм хурлаусының эргәһенә атылып килеп етә лә уң ҡулының һырты менән Ҡудряшовтың елкәһенә һуға. Тегеһе киҫелгән ағас кеүек ергә ҡолай һәм ҡабат тора алмай. Уны дауаханаға оҙаталар. Мейеһе һелкенеп дауаханала ике-өс ай ятҡандан һуң ғына аяҡҡа баҫып, хеҙмәтен дауам итә. Аҡылы самалы, хәрәкәттәре һүлпән булһа ла, уны комиссовать итмәйҙәр. Әле булһа ротаның 2-се взводында хеҙмәт итеп йөрөй. Шулай итеп, ят милләттәрҙе күрә алмаусанлығы, милләтселеге арҡаһында Ҡудряшов ғүмерлеккә ярты кешегә әүерелә. Һуңынан беленеүенсә, Рөстәм каратист икән. Шуның арҡаһында ҡыҙыу баштар унан ҡоттары осоп тора.

Ниһайәт, Амангилдинға мендәргә баш төртөргә форсат тейҙе.

* * *

Иртәнге ашты ашағас, 1-се рота линейкаға теҙелде. Шунда ғына яңы килгән һалдаттар үҙҙәренең взвод командирҙарын күрҙеләр. 3-сө взвод командиры

лейтенант Свиридов Макар Семенович тигән кеше булып сыҡты. Ҡолға буйлы, өҫтөнә оҙон итәкле тун кейеп алған. 3-сө взводтың бер һалдаты уға былай тип мөрәжәғәт итте:

— Макар Семенович, башым бик ауырта. Бәлки, миңә эшкә бармаҫҡа рөхсәт итерһегеҙ?

— Рөхсәт итәм. Тик теләһә ҡайҙа аҙып-туҙып йөрөмә! Карауатта ғына ятып ауыры!

Был һөйләшеүҙе ротный ишетеп ҡалды:

— Туҡта, туҡта! Рядовой Колдунов, башығыҙ ниңә ауырта ул? Ҡан баҫымы күтәрелдеме? Ни сәбәптән? Тағы наркотик ҡуллана башланыңмы? Ҡайҙан алдың? Кем бирҙе? — Шадрин ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. — Гашиш ашағаның күҙ төбөңдән күренеп тора, ҡара янып сыҡҡан. Марш эшкә!

Баҡһаң, Колдунов ҡырҙа йөрөгәндә киндер һабаҡтары күреп ҡала. Уларҙың япраҡтарын йыйып, кеҫәләренә тултыра. Аҙаҡ, яйын табып, котелогында майға ҡушып ҡайната һәм ашай. Өс-дүрт ҡалаҡ ашаһа, еңеләйә башлай икән. Кәйефләнеүҙән ләззәт табып, илереп йөрөгән сағында уны майор Фәйзуллин тотоп ала.

Рота һалдаттары һәм сержанттары эшкә таралды. Шул иҫәптән хәйләләшеп маташҡан Колдуновты ла эшкә оҙаттылар. 7—8 йәш һалдатты хәрби база тарафынан шефҡа алынған совхозға ебәрҙеләр. Улар араһында Йыһангир менән Илнур ҙа бар ине. КП аша сыҡҡанда дежурҙа торған “сүмес” Соснов уларға ошондай бойороҡ бирҙе:

— Һеҙ совхоздың ҡошсолоҡ фермаһына тиҙәк таҙартырға бараһаҡһығыҙ. Тауыҡтар унда йыл әйләнәһенә йомортҡа һала. Һәр берегеҙ миңә ферманан 30-ар йомортҡа алып ҡайтып бирә.

— Нимә эшләтәһең ул шул хәтле йомортҡаны? — тип һораны Сосновтан Богданович.

— Уныһы минең эш, — тип эре генә яуап бирҙе “сүмес”.

— Йомортҡаларҙы һатып, аҡса эшләй үҙенә. Әллә шуны ла белмәйһегеҙме? — тип яуап бирҙе аранан бер һалдат.

Хәрби базала “бабайҙар” һәм “сүместәр” араһында, ғөмүмән, һалдаттар менән сержанттар араһында ҡырын яҡтан аҡса эшләү ғәҙәте бик көслө. Һәр кемгә ай һайын бер аҙ аҡса, 15-әр ҡап “Прима” тәмәкеһе, ә тартмағандарға шәкәр бирелә. Дембелдәр, “бабайҙар” “рухтар”ҙың аҡсаларын үҙҙәренә тартып алалар, тәмәкеләрен, хатта шәкәрҙәрен дә ҡармайҙар. Үҙҙәре талап алған сигареттарҙы, шәкәрҙе ауылға алып барып, арзаныраҡ хаҡҡа һаталар. Бөтә подразделениеларҙа ла ошо рәүешле аҡса эшләү бара.

Йыһангирҙар көнө буйы тырышып эшләнеләр. Ҡайтыр саҡта улар ферма мөдиренән йомортҡа һорарға ҡыйманылар. Шулай итеп, КП дежурныйы Сосновтың наказы үтәлмәне. Ниндәй ферма бушҡа кемгәлер 300 йомортҡа биреп ебәрһен ти? КП аша еңел генә үтергә уйлағайнылар, ниәттәре барып сыҡманы. Соснов уларҙың береһен дә эскә үткәрмәне. Эштән арып ҡайтҡан егеттәрҙе теҙеп ҡуйҙы ла, ҡулына осо яланғас үткәргес тотоп, 220 вольтлы ток менән һуҡтыра башланы. Токтан һуғылған беренсе һалдат ҡысҡырып ебәрҙе һәм ҡулын ыуаларға кереште. Соснов икенсе һалдаттың терһәгенән тотоп, уның ҡулына ла үткәргестең осон тейҙерҙе. Әлеге һалдат ток һуғылыуҙан йығылып китте һәм бер нисә секундтан һикереп тороп, аяғына баҫты. Соснов асыуҙан тонған

күҙҙәре менән Амангилдинға сәнсеп ҡарап алды ла ҡулына үрелде. Йыһангирҙың төҙөлөштә эшләгән саҡта ҡулдары ҡорос кеүек сыныҡҡайны. Ул Сосновтың уң ҡулын терһәк тәңгәленән кире яҡҡа бөкләне лә үткәргестең осон “сүмес”тең сикәһенә төрттөрҙө. Соснов ауыртыныуҙан һәм ҡурҡыуҙан аҡырып ебәрҙе лә ергә гөрç итеп ҡолап китте. Был көтөлмәгән хәл йәш егеттәргә ҡыуаныс килтерҙе. Улар йүгерешеп КП аша сыҡтылар ҙа казармалары яғына саптылар.

* * *

Ял көнө ине. Йыһангир ленкомнатаға инеп, хат яҙырға ултырҙы. Ул башта Гөлбиназға, шунан олатаһына яҙҙы. Өйҙәгеләрҙе борсомаç өсөн бындағы хәлдәрҙе матур буяуҙар менән һүрәтләне. Амангилдин бер юлы Әсфиргә лә хат яҙырға булды. Дуçына ул ошоларҙы теҙҙе: “Теге ваҡыт һинең армия хаҡында һөйләгән һүҙҙәрең дөрөçкә сыҡты, брат. Дедовщина тигән нәмә ул армияны эстән ҡаҡшатыусы, уның тере күҙәнәктәрен үлтереүсе яман шеш менән бер икән ул. Быға ҡаршы командование көрәш алып бармай. Бик һирәк командирҙар ғына дедовщинаға ҡаршы, күпселеге был әшәке күренешкә ҡарата моңһоҙлоҡ, вайымһыҙлыҡ күрһәтә. Бәйҙән ысҡынған ике аяҡлы йыртҡыстарҙың ҡырағай ҡылыҡтары бандиттар ҡылығынан да әшәкерәк һәм хәтәрерәк”.

Хат яҙып бөтөр-бөтмәçтән старшина Йыһангирҙы үҙенең янына саҡыртып алды. Ял көнө булһа ла, капитан Шадрин һәм прапорщик Назаров ротаға килмәй ҡалмайҙар. Амангилдин рота канцелярияһына барып ингәндә, улар оҙон өçтәл артында ултыралар ине. Шадрин стена буйындағы ултырғысты күрһәтеп, Амангилдинға ултырырға ымланы.

— Һин гражданкала төҙөлөштә ташсы булғанһың икән, — тине ротный алдында ятҡан “Личное дело”ға күрһәтеп. — База эргәһендә оҙаҡламай офицерҙар өсөн ял йорто төҙөлә башлаясаҡ. Ташсылар эҙләйбеҙ, эшкә бараһыңмы?

— Булдырабыҙ уны, иптәш капитан, — тип яуап бирҙе Йыһангир.

— Шул һүҙҙе ишетергә теләгәйнем дә инде, — тине ротный, ҡәнәғәт йылмайып.

— Хәҙер часты ҡалдырырға тейешменме?

— Юҡ, иптәштәрең менән казарманан йөрөп эшләйәсәкһегеҙ. Аңлашылдымы?

— Төшөндөм, иптәш капитан. Тырышып эшләрбеҙ.

— Беҙҙең ротанан тағы ла дүрт кеше буласаҡ, һин — старший. Ярҙамсылар итеп кемдәрҙе алырға теләйһең?

Йыһангир бер нисә секундҡа уйға ҡалды.

— Иптәш капитан, “дедтар”ҙы ундай яуаплы эшкә алырға ярамай. Улар барыбер эшләмәйәсәк, тик ҡамасау ғына итәсәктәр. Төҙөүселәр араһына рядовой Устиновты алырға кәрәк. Ул намыçлы егет. Тағы шуныһы — эштән ҡайтыу менән “дедтар” сигарет таптыра башлайҙар. Алып ҡайтмаһаҡ, туҡмайҙар. Ашханала йәш һалдаттарҙың ризыҡтарын тартып алып ашайҙар. Йә булмаһа, аштарына, бутҡаларына, компоттарына төкөрәләр, ҡаҡыралар. Шунан ғауға сыға.

— Старшина ашханала шул тәртипһеҙлектәрҙе күреп тора, ә бер нимә лә өндәшмәй, — тине ротный прапорщик Назаровҡа асыулы күҙҙәрен төбәп.

Старшина ла яуапһыҙ ҡалманы:

— Иптәш капитан, мин уларҙың әшәкелектәренән арыным. Уларға үҙемсә яза ла биргәнем бар.

— Ә ниңә был турала беҙгә әйтмәнең? — тип һораны ротный аптыраған ҡиәфәттә.

— Әйтеүҙән ни файҙа? Һеҙ уларҙы шуның өсөн генә төрмәгә ултырта алмайһығыҙ, гауптвахтанан ҡурҡмайҙар. Әйткәс, шуны ла әйтәйем: "дедтар" тарафынан ниндәй генә әшәкелектәр, енәйәттәр эшләнмәй, ә взвод командирҙары бер нәмәгә лә ҡыҫылмай. Йәш һалдатты туҡмап ташлайҙар икән, взводныйҙар быға бошоп та бирмәй. Эш хаҡы алғанда ғына ротаға килеп күренәләр ҙә юҡҡа сығалар. Эт менән дә табырлыҡ түгел. Ошондай тәртипһеҙлекте бер старшина ғына еңеп сыға аламы һуң?

* * *

Төҙөлөш ҡыш буйы барҙы. Унда "ҡарттар" йәлеп ителмәгәнлектән, йәш һалдаттарға эшләүе күпкә еңелерәк ине. Көндәр йылынғас, төҙөүселәргә лә күңеллерәк була барҙы. Ниһайәт, буласаҡ ял йортоноң стеналары һалынып бөттө. Төҙөлөш материалдары менән хәрби етәкселәр бик иркен мөғәләмә итте. Бер йөк машинаһын төҙөлөшкә килтереп бушатһалар, икенсеһен һул яҡҡа оҙатып торҙолар. Ике ташсыны, шул иҫәптән Амангилдинды ла, бер нисә һалдат менән бергә полковник Пономаревтың шәхси йортон төҙөүгә күсерҙеләр. Дөрөҫөрәге, часть командиры йәшәгән йортҡа өс стенанан торған түкәтмә эшләп, уны ҙурайтырға тотондолар. Йыһангир ял йортон һалғанда ла, командир йортон төҙөгәндә лә көсөн аямай эшләне, фотоһы хатта ротаның почет таҡтаһына ҡуйылды.

Йорт һалыу еңел эш түгел. Ярай әле, күңелдәрҙә рухи балҡыш һәм дәрт уятып, яҙ килде. Ҡарҙар иреп юҡҡа сығыу менән ер өҫтөнә йәшел үләндәр ҡалҡты һәм донъя йәшеллеккә күмелде.

Өйҙөң төкәтмәһен тамамлауға тирә-яҡты нығытыу, төҙөкләндереү, матурлау кеүек эштәр өҫтәлде. Аҙаҡ кирбестән ҡойма ҡорҙолар. Был ҙур эш тамамланғас, гаражға бетондан юл һалырға ҡушылды. Был эште башлар алдынан прораб егеттәрҙән:

— Йә, әйтегеҙ әле, бетондың пропорцияһы нисек? — тип һораны.

Был һорауға Амангилдин ғына яуап бирә алды:

— Бергә — өс. Бер көрәк цементҡа өс көрәк ҡырсын таш ҡушырға кәрәк.

— Афарин, рядовой Амангилдин, эштең нескәлектәрен яҡшы беләһең икән. Улай булғас, төҙөлөш материалдарын тәләф итмәй генә, эште ойоштороп ебәр инде.

Һалдаттар Йыһангир етәкселегендә эшкә тотондолар. Ике-өс көндән ул да тамам булды.

* * *

Амангилдиндың тимер юл ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән Хәбир дуҫынан хат килеп төштө. Алты ай уҡыу подразделениеһында булып, хәрби һөнәр алғас, апрель аҙағында Бүрәт республикаһына оҙатылған икән. Яңы урында башлыса урыҫ һәм бүрәт егеттәре хеҙмәт итә. Дуҫының хәлдәре шәптән түгел икән. Туҡмалып, госпиталгә эләккән. Башына ултырғыс менән һуҡҡандар, психиатрия бүлегендә ята. Хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылған, өйөнә оҙатасаҡтар.

Полковник Пономарев, йәмһеҙ генә йортоноң төҙөүселәр тырышлығы менән күркәм төҫкә инеүен күреп, һоҡланып бөтә алманы. Эштәр теүәлләнгәс, Амангилдинды үҙ кабинетына саҡыртып алды ла былай тине:

— Бына нимә, рядовой Амангилдин. Приказ менән бөгөнгө көндән һиңә ефрейтор званиеһы бирелә, — командир һул беләгенән алтын менән ялатылған ҡул сәғәтен сисеп, Йыһангирға бирҙе. — Быныһын минең йортто төҙөгәндә тырышлыҡ күрһәткәнең өсөн бүләк итеп бирәм.

Егеттең бүләкте алырға ҡыймай торғанын күреп:

— Ал, ысын күңелдән бирәм, — тине полковник.

Йыһангир часть командиры ҡулынан сәғәтте алып, һул беләгенә таҡты һәм честь бирҙе.

— Рәсәй армияһына хеҙмәт итәм! Рәхмәт, иптәш полковник.

— Артабан да тырышып эшләһәң, тиҙҙән сержант званиеһы биреп, үҙеңде отпускыға ла ҡайтарырбыҙ. Белеүемсә, өйҙә кәләшең дә бар икән.

— Улым да бар. Тыуыуына бер аҙна булды.

— Ҡотлайым! Буласаҡ һалдат, тимәк! — тине Пономарев. — Бөгөн үк штабҡа кереп, белешмә ал, ул хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренә социаль льготалар менән файҙаланырға хоҡуҡ бирә. Иш янына ҡуш насар булмаҫ.

— Ҡаңәшегеҙ өсөн рәхмәт, иптәш полковник. Бөгөн үк ҡатыныма ебәрермен.

Тиҙҙән малайы тыуыу уңайы менән ялға ҡайтырға рөхсәт иттеләр. Етмәһә, кесе сержант званиеһы ла бирелде. Йыһангир быларҙы ишетеп, башта үҙ ҡолағына үҙе ышанманы. Ҡыуаныстан бейеп китергә әҙер ине. Тиҙ генә әҙерләнде лә, документтарын алып, ҡаланың тимер юл вокзалына ашыҡты. Ҡиске поезға ултырып, таң менән Өфөгә килеп төштө. Тыуған яҡтарҙы күргәс, күҙҙәренә йәш эркелде.

Ҡала магазиндары тәүлек әйләнәһенә эшләй. Шуларҙың береһенә кереп, барлы-юҡлы ғына аҡсаһына олатаһына, кәләшенә, малайы Ғилемдарға күстәнәстәр алды ла автовокзалға бара һалып, автобус менән Стәрлетамаҡҡа ҡайтып китте. Өс сәғәт тә үтмәне, ғаиләһенә атлыҡҡан сержантты автобус Стәрле автовокзалына килтереп еткерҙе. Ул күҙ ҡарашы менән күңеленә яҡын ҡаланы байҡап сыҡты. Шунан троллейбусҡа ултырып, өйөнә елдерҙе.

Ә өйҙәгеләр уның ҡайтыуын белмәйҙәр ине. Йыһангирҙың ҡапыл пәйҙә булыуы оло шатлыҡ тыуҙырҙы. Сынтимер ейәнен һау-сәләмәт күреп, ҡыуаныстан күңеле тулды.

Гөлбиназ иренең йөҙөнә ентекләп ҡарағас, хатта ҡысҡырып үк ебәрҙе:

— Сикә сәстәрең ағарған да баһа, йәнем!

— Һине юҡһыныуҙан шулай, — тип шаяртты Йыһангир. — Һин дә һурылып киткәнһең. Олатайым да аҙыраҡ бирешкән.

Ҡис еткәс, иркенләп һөйләшеп ултырҙылар.

— Ҡавказда тағы ла һуғыш сығырға тора. Уйландыра, — тине олатаһы ейәненә. — Ябыҡҡанһың, күҙҙәрең дә уйсанланып ҡалған. Ҡыйынлыҡтар етәрлектер инде был заманда армияла. Тик улар башты шаңҡытырлыҡ, миңрәүләндерерлек булмаһын ине.

— Артыҡ ҡайғырырлыҡ бер нимә лә юҡ, олатай, хәсрәтләнмә. Бишҡурайҙан Әбдрәфиҡ ағайҙың улы Хәбирҙе беләһең бит әле, армияға тиклем Ҡумертауҙа физкультура техникумында уҡығайны. Хәрби хеҙмәткә лә бер ваҡытта киттек. Хатлашып торабыҙ. Әлеге көндә Улан-Удэла дауаханала ята.

— Нимә булған уға? — тине Сынтимер аптырап.

— Башына һуғып, мейеһе зарарланғандыр, тип уйлайым. Үҙе бөтәһен дә әйтеп бөтмәй.

— Бына тигән егетте әрәм иткәндәр, — тине өлкән Амангилдин. — “Дедовщина” тигәне ҡара яу икән. Сталин юҡ, ҡыра һуғыр ине ул бандиттарҙы. Һиңә лә йоҙроҡ күтәрәләрме әллә?

— Бар ерҙә лә шулайҙыр инде, олатай. Әммә беҙҙең ротный “бабайҙар”ға шашынырға бик ирек ҡуймай, белеп ҡалһа, язаға тарттыра.

Өҫтәл артында һүҙ башлыса Йыһангирҙың хәрби хеҙмәте хаҡында барҙы.

— Олатай, миңә Хоҙайҙан иҫәнлек һора, хеҙмәттән имен-аман йөрөп ҡайтыуымды telә. Ниндәйҙер серле һәм көслө доғалар уҡып, һуғышта иҫән ҡалғанһың, улай ғына ла түгел, иптәштәреңде лә ҡотҡарғанһың. Мин дә һинең доғаларыңдың көсөнә ышанам, — тине Йыһангир.

— Әллә һуғышҡа алырға уйлайҙармы?

— Кем белә инде, олатай. Һалдат бөгөн тыныс ҡына хеҙмәт итә, ә иртәгә уны ут эсенә алып барып тығалар. Үҙең беләһең: донъялар боларып тора. Ҡавказда хәлдәр киҫкенләшә. Һуғыш башланып китһә, һалдаттарҙы күпләп оҙатасаҡтар унда.

Тағы ла байтаҡ һөйләшеп ултырғас, ҡарт ҡайтып китте.

* * *

Бер-береһен күреп-һөйөп туя алмаған көндәр һәм төндәр бик тиҙ үтте. Амангилдин кире хәрби часына китте. Өйҙәгеләр уны тағы ла илап оҙатып ҡалдылар.

Йыһангир барып еткәндә, көн кисләгәйне. Уның отпускынан әйләнеп килеүенә дуҫтары ҡыуанды, бигерәк тә Сергей Устинов шатланды. Алып килгән күстәнәстәрен взвод егеттәренә таратып сыҡты. Сергейға ла өлөш сығарҙы. Юлдан арып килгән Йыһангир башын мендәргә терәү менән йоҡлап китте.

Иртәгәһен старшина Амангилдинды бер төркөм һалдаттар менән бассейнға эшкә ебәрҙе. Улар араһында Башҡортостан егеттәре лә байтаҡ ине. Бассейндың һыуын ағыҙып, уның иҙәненә, ҡырҙарына кафель плиткалары йәбештерҙеләр. Эш барышында Йыһангир яҡташтарына, милләттәштәренә роталағы хәлде аңлатып бирҙе. “Бабайлыҡ”тың иҫ киткес яуыз нәмә икәнлеген, уға ҡаршы күмәк көс менән көрәшергә кәрәклеген, берҙәмлек талап ителеүен төшөндөрҙө.

Эш өҫтөндә йәй үтте. Ғүмер аҡҡан һыу кеүек үтеп кенә тора, йәйҙең дә ялынан тотоп алып ҡала алманы Йыһангир. 1999 йылдың көҙө килеп етте. База территорияһында төҙөлөш эштәре бер генә минутҡа ла туҡталманы. Амангилдин эштән ҡурҡа торғандарҙан түгел, донъялар ғына тыныс булһын. Әммә көҙ етеү менән һалдаттарҙың баш осонда ҡара болоттар ҡуйыра башланы — Ҡавказда икенсе чечен кампанияһы башланып китте. Халыҡтың күҙен томалау өсөн уны терроризмға ҡаршы операция, тип атанылар.

Бер көндө Йыһангир эштән ҡайтып, йыуынып ҡына бөткәйне, уны ротный үҙ янына саҡыртты. Амангилдин белә: юҡ-барға ғына саҡыртмайҙар. Ҡапитан Шадрин күңелһеҙ ҡаршыланы һәм стена буйындағы ултырғысҡа ултырырға ишара яһаны.

— Юғарынан һине, Амангилдин, бер төркөм һалдаттар менән Ҡавказға, һуғыш барған яҡтарға ебәрергә, тигән бойороҡ бар. Дөрөҫ, туп-тура ут эсенә

алып барып индермәҫтәр, тип уйлайым. Һеҙҙе башта Төньяҡ Ҡавказ хәрби округына ебәрәсәктәр. Унда барғас, төрлөгөҙҙө төрлө яҡҡа таратасаҡтар, йәғни хәрби частарға оҙатасаҡтар. Бәлки, бер аҙығыҙ хәрби эшкә өйрәнеү өсөн сборға эләгер. Һинең кеүек оҫта төҙөүселәрҙе, ихтимал, емерелгән хәрби объекттарҙы аяҡҡа баҫтырыу өсөн тылда ҡалдырырҙар, ә кемдәрҙелер туп-тура ут эсенә индереп ебәрерҙәр. Һин оҫта төҙөүсе булараҡ, бында ла кәрәкһең, мин әле лә һине үҙебеҙҙә ҡалдырыу яғында. Тик генерал Редюков барлыҡ башҡорт егеттәрен Ҡавказға ебәреүселәр исемлегенә индерергә ҡушҡан. Яңыраҡ ҡына беҙ 1-се ротанан Пахомов, Свиридов, Жулихиндарҙы Төньяҡ Ҡавказ хәрби округы ҡарамағына оҙатҡайныҡ инде, ә улар юлда, һаҡсыларҙың асыҡ ауыҙлығынан файҙаланып, поездан төшөп ҡалғандар һәм ҡасҡандар. Хәҙер беҙҙән яҡшы, тәртипле, мораль яҡтан тотанаҡлы башҡорт егеттәрен ебәреүҙе һорайҙар. Бөгөн үк әйберҙәреңде, кейемдәреңде әҙерлә. Иртәгә иртәнге сәғәт 8-ҙә автобус аэропортҡа алып барасаҡ, артабан самолет менән Төньяҡ Ҡавказға осасаҡһыҙ.

Улар бер-береһенә изге теләктәр теләп хушлаштылар. Һуғыш барған яҡтарға китеү хәбәре Йыһангирҙың башында мең төрлө уй ҡайнатты, оҙон керпекле ҡара күҙҙәре бойоҡлоҡ, һағыш эсенә сумды.

* * *

Ноябрь айының ҡарлы ҡатыш ямғырлы көнөндә Йыһангир Ҡавказға осто. Был ваҡытта Чечня һуғышының икенсе кампанияһы башланғайны. 1994—1995 йылдарҙа Рәсәй армияһы Дудаевтың көслө ҡыҫымына эләккәс, еңеү яулаған чечен халҡы үҙенә бойондороҡһоҙлоҡ алдым, тип уйлағайны. Дөйөм ҡыуанысҡа, эйфорияға бирелеп, улар һиҙгерлектәрен юғалта төштө һәм икенсе һуғышҡа ныҡлап әҙерләнмәне. Ғорур тау халҡының үҙаллылыҡ алыуы Рәсәйҙең ҡан көҫәүсе һуғыш суҡмарҙарына оҡшаманы. Ҡавказда тыныслыҡ урынлашып та өлгөрмәне, Чечен республикаһына йәнә ҡара яу ябырылды. Танауҙары ла кибергә өлгөрмәгән йәш малайҙарға автоматтар тottороп, дөрләп янған ут эсенә ҡыуалап индерә башланылар.

Бик күп Башҡортостан егеттәрен, ҡорал менән эш итергә йүнләп өйрәтеп тә тормай, ҡаты бәрелештәр барған ҡыҙыу нөктәләргә ебәрҙеләр. Йыһангирҙы һәм тағы бер нисә егетте тәүҙә һуғышҡа әҙерләү өсөн сборға оҙаттылар. Унда ике-өс көн самаһы булғас, һалдаттарҙы спецназға алыу өсөн йыя башланылар. Әлбиттә, унда физик яҡтан таҙа егеттәрҙе генә һайлап алалар ине. Йыһангирҙың да спецназға барыу теләге уянып, уйын командирҙарға еткерҙе. Ниәтенә ҡаршы килмәнеләр. Был элиталы ғәскәргә һалдатты бар яҡтан тикшереп, һынап алалар. Бының өсөн һалдат башта оҫта һуғыша белеүен иҫбатларға тейеш.

Бына Йыһангирҙы спортзалға саҡырып килтерҙеләр һәм бер лейтенант менән алышырға ҡуштылар. Әлбиттә, был алыш ысын һуғыш шарттарына яраҡлаштырып ойошторолғайны. Лейтенант ажарланып, өҫтөнлөгөн һыҙыҡ аҫтына алып һуғышты. Етмәһә, ул ниңәлер һуғышыу алымдарын самалы ғына белгән Йыһангирҙың башына тибергә тырыша ине. Шулай әтәсләнә торғас, офицер һалдаттың һул яҡ ҡашын йырта типте. Егет артабан һуғыша алманы — ҡан китте. Шулай булһа ла, лейтенант уны үҙенә алырға булды.

Артабан һуғыш күнекмәләренә өйрәтеү башланды. Тиҙҙән Йыһангирҙарҙы нарядҡа йөрөтә башланылар. Резина дубинка тотоп, офицерҙарҙың дөйөм ятағын,

КПП-ларҙы һаҡлайҙар. Егеттәрҙең кәйефе әллә ни шәп түгел. Ни тиһәң дә, уларҙы һуғышҡа әҙерләйҙәр бит. Сәйәси әҙерлек дәрестәрендә һалдаттарҙың мейеһенә көн дә патриотизм тойғоларын тыңҡыслап тултырһалар ҙа, Рәсәй ҡоралының данын күккә күтәреп маҡтаһалар ҙа, береһе лә һуғыш-ҡырылыш барған ергә атлығып тормай. Шулай ҙа әҙерлек курсын тамамлағас, теләйҙәрме-юҡмы, ҡораллы бәрелештәр үҙәгенә ебәреләсәктәр.

Дүшәмбе көн. Өйрәнеү һәм уҡыу дәрестәре тамамланыу менән, аҙыраҡ буш ваҡыт булыуҙан файҙаланып, Йыһангир Гөлбиназға хат яҙырға ултырҙы. "Һаумы, ҡәҙерлем Гөлбиназ! Һиңә Ҡавказ тауҙары хәтле ҙур сәләмдәр ебәреп ҡалам. Мине уйламағанда Төньяҡ Ҡавказ хәрби округына хеҙмәт итергә ебәрҙеләр. Беҙҙең хәрби ҡаласыҡ Пятигорскийҙан 2—3 саҡрымда урынлашҡан. Мин бында сборҙамын. Һөйөклөм, хаттарыңды алып торам. Түбәм күккә тейеп, уларҙы ҡат-ҡат уҡыйым. Бында хеҙмәт иткән егеттәрҙең күпселеге башҡорт-татарҙар. Мосолмандарҙы мосолмандарға ҡаршы һуғышҡа ебәреүҙәрен уйлаһам, ҡайғынан йөрәгем ярылып киткәндәй була. Хеҙмәтем һәйбәт бара. Климат беҙҙәге кеүек: әле һыуыҡ, әле йылы, йә ямғыр яуа, йә ҡоро. Теге аҙнала экскурсияға барҙыҡ, Лермонтовтың дуэле булған ерҙе күрҙек. Ниңәлер Ҡавказға килеп һәләк булған шағир йәл булып китте. Тәмәке тартырға өйрәндем. Бөтәһе лә тартҡас, мин дә ылығып киттем. Бында Терек тигән ҙур тау йылғаһы ҡотороп ағып ята, шунда һыу индем. Ярар, хуш. Һинән хат көтөп — Йыһангир".

Бер айға иҫәпләнгән әҙерлек курсы тамамланды. Спецназ күнекмәләренә өйрәнеү осоро ла Йыһангирҙар өсөн шуның менән осланып ҡуйҙы. Чечняла фронт линияһы Аргунға яҡын урындарҙан үтә. Спецназсыларҙы, шул иҫәптән Амангилдинды ла ҡаты һуғыш барған урындарға оҙатырға булдылар. Аргун эргәһендә федералдарҙың механизацияланған дивизияһын яңы көстәр менән тулыландырып, чечен боевиктарының оборонаһын өҙөргә, тигән бурыс ҡуйылғайны.

Иртәнге ҡараңғылыҡта, автобустарға ултыртып, һуғышҡа китеүселәрҙең беренсе төркөмөн оркестр тауыштары аҫтында дивизия ҡарамағына оҙаттылар. Дивизия биләгән плацдармға бара торған юл тау йылғалары үҙәндәре, ҡуйы урмандар аша үтә. Ҡеше йәшәрҙәй урындарҙа чечен ауылдары, казак станицалары, ҡасабалар урынлашҡан.

Ҡолоннаны арттан — ике, алдан бер БТР һаҡлап барҙы. Төш ауғас, Малиновская станицаһына барып керҙеләр. Бында дивизияның штабы урынлашҡан икән. Һуңғы көндәрҙә ҡаты һуғыштар барышында дивизия, чечен боевиктарының контрһөжүменә эләгеп, ҡыйралышҡа дусар була һәм артҡа сигенә. Ҡомандованиеның һөжүм итеү йүнәлешен дөрөҫ билдәләй алмауы арҡаһында һуғышта танктарҙы файҙалана алмайҙар. Ардон йылғаһы буйындағы йомшаҡ ләмле урынға эләккән танктар шунда баталар. Пехота, артиллерия, танктар һәм авиация тарҡаулыҡ күрһәтә, шуның арҡаһында Рәсәй самолеттары йыш ҡына үҙҙәренең ут нөктәләрен, терәк пункттарын, хатта хәрәкәт итеүсе пехота, танк колонналарын бомбаға тота.

Был дивизияның чечендарҙың бер уҡсы полкы тарафынан туҡмалып теткеләнеүе рустарҙың юғары командованиеһын ныҡ шаңҡытты. Ә бит техника яғынан өҫтөнлөк Рәсәй ғәскәрҙәре яғында. Чечендарҙың, рустарҙыҡы кеүек, өҫтән бомба ташлаусы самолеттары ла, үкереп килеүсе танктары ла юҡ. Шулай булһа ла, үҙ еренең азатлығы өсөн һуғышҡан бер чечен яугиры ун Рәсәй һалдатына торош итерлек һуғыша.

Дивизияның миномет һәм танк батальондары бынан 10—15 саҡрым самаһы алыҫлыҡта ята. Ҡыҫҡа табан юл хәүефле булғанлыҡтан, курсанттарҙы дивизия подразделениеларына иртәнсәк алып барырға ҡарар иттеләр. Малиновская — ҡасабаға торош итерлек ҙур ауыл. Унда аҙыҡ-түлек келәттәре лә, артиллерия складтары ла, боеприпастар һаҡланған таш йорттар ҙа, хәрби техника ангары ла бар. Был хәрби объекттарҙы һаҡлау һәм хеҙмәтләндереү өсөн байтаҡ ҡына һалдаттар йәлеп ителгән. Бынан тыш, тотош бер ротаға станицаны тәүлек әйләнәһенә һаҡлау бурысы йөкмәтелгән. Улар көндөҙ ҙә, төндә лә ҡарауыл һәм патруль хеҙмәтен үтәйҙәр.

Көндөҙгө сәғәт дүрттәрҙә курсанттарҙы бүлмәләргә тараттылар. Йыһангир Илһам исемле яҡташ татар егете менән икәүләп 2-се казарманың бер бүлмәһенә урынлаштылар. Бында патруль хеҙмәтен үтәүсе, дивизияның хужалыҡ эштәрен алып барыусы егеттәр йәшәй икән.

* * *

Бына-бына һуғыш барған районға алып китерҙәр, тип йөрөгәндә, спецназсыларға Аргунға китергә бойороҡ бирелде. Тынысһыҙ Ҡавказ ерендәге хәрби хәлдең үҙгәреп тороуы сәбәп булды быға. Ставрополь яғынан Моздокка асфальт һәм грунт юлдар буйлап бер туҡтауһыҙ ҡорал, боеприпастар, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым тейәлгән колонналар ағылып тора. Был хәрби йөктәр Моздоктан төрлө юлдар аша Чечнялағы федераль ғәскәрҙәр һуғышып йөрөгән райондарға тиклем барып етә. Моздоктан Аргунға табан барған бер колоннаға чечен боевиктары һөжүм итә. Улар радио менән идара ителгән фугас менән колоннаның алдан һәм арттан барған машиналарын шартлаталар. Беҙҙең һалдаттар менән боевиктар араһында ҡаты бәрелеш була. Колоннаға ҙур зыян килтергәс, чечендар таралып юҡҡа сыға. Көтөлмәгән һөжүм арҡаһында беҙҙекеләр араһында үлеүселәр күп була. Улар көс-хәл менән Малиновская станицаһына килеп етә. Спецназсылар әлеге колоннаның һәләк булған һалдаттарын алмаштырырға тейеш. Ҡыйратылған машиналарҙы яңылар менән алмаштырғас, колонна юлын дауам итте. Амангилдин һәм уның иптәштәре БТР-ҙарға кереп ултырҙылар. Йөк төйәлгән ауыр машиналар, бронетранспортерҙар һуғыш барған райондарға яҡын урындар аша әленән-әле үтеп торалар. Боевиктар тынғылыҡ бирмәй, юлдың ике яғынан да бер туҡтауһыҙ автоматтан, пулеметтан аталар. Амангилдин ултырған броневикта ла тыштан борсаҡ менән бәргән кеүек пулялар таҡылдағаны ишетелә.

Ваҡытлыса отделение командиры итеп тәғәйенләнгән сержант броневик тишектәренән автомат, пулемет менән юлдың ике яғына атып барырға ҡушты. Егеттәр автоматтарҙан берәр патронлап ата-ата барҙылар. Тирә-йүнгә пулялар һиптереп, пулемет таҡылданы. Амангилдин да юл буйына автоматынан ата-ата килде.

Малиновская станицаһынан төш ваҡытында ҡуҙғалып киткән колонна төн урталарында Аргунға барып етте. Егеттәрҙе ямғыры һибәләп торған декабрь төнө ҡаршы алды.

Колоннаны оҙатып килеүсе һаҡсылар морон төрткән урын Аргун ҡаласығының шәхси йорттарҙан торған биҫтәһе булып сыҡты. Әлеге биҫтәлә һуғыш-ҡыйралыштар арҡаһында сит яҡтарға ҡасып киткән ғаиләләрҙең бушаған йорттары федераль ғәскәрҙәргә ҡараған частарҙың дислокация

урынына әүерелгән. Ҡалала, ҡасандыр Сталинградтағы кеүек, һәр йорт өсөн һуғыш бара. Бына-бына һуғыш ялҡыны ялмарға торған йорттарҙың ишек, тәҙрә тупһаларына ҡом тултырылған ҡапсыҡтар өйөлгән. Ҡасандыр тыныс тормош гөрләп торған ҡалала һәр өй бәләкәй генә ҡәлғәне хәтерләтә. Камуфляж кейгән урта буйлы, етеҙ хәрәкәтле чечен капитаны Амангилдинды һәм уның иптәштәрен өс ҡатлы мәктәпкә алып килде. Мәктәп һуғыш барған ерҙән өс йөҙ метр самаһы ғына алыҫлыҡта, хәүефле урында ултырһа ла, уның бүлмәләре һуғыш ғәрәсәте ҡоторған райондан йыраҡ китеп өлгөрмәгән ҡасаҡтар, частарынан тороп ҡалған һалдаттар, хәрәкәттәге армияның бер төркөм ғәскәрҙәре менән тулғайны.

Ҡапитан ҡул фонаре менән яҡтыртып, бүлмәләрҙе, коридорҙарҙы, спорт һәм тамаша залдарын ҡарап сыҡҡас, егеттәрҙе бер бәләкәй генә бүлмәгә саҡырып алды. “Төнгө ҡунаҡтар” капитан күрһәткән бүлмә ҡырына килеп, эскә үтә алмай, ишек төбөндә туҡтап ҡалдылар. Уң яҡ мөйөштә, тумбочка өҫтөндә ҡыуығы ҡоромланып бөткән керосин лампаһы быҫҡып ултыра. Ҡыҙғылт яҡтылыҡтың көсһөҙ нурҙары иҙәнгә һуҙылып төшөп ятҡан ир-егеттәрҙең кәүҙәләрендә, биттәрендә уйнай.

Ябай халыҡ та, шинель ябынып йәки түшәп ятҡан хәрбиҙәр ҙә бар бында. Ҡапитан һаҫыҡ тәмәке төтөнө һәм шарап еҫе менән тулған бүлмә эсен иғтибар менән ҡарап сыҡҡас, йоҡлап ятыусыларға:

— Йәйрәп төшөп, иркенләп ятҡанһығыҙ. Стеналарға арҡа терәгән килеш ултырып серем итһәгеҙ ҙә ярар. Дудаевсыларҙы илдән һепереп түгеп, Ичкерияны азат иткәс, иркенләп йоҡларһығыҙ! — тине.

— Дудаев еребеҙҙе азат иткәс, һуғыш туҡталғайны. Битһеҙ хыянатсылар яңынан уларҙы саҡырып килтерҙеләр. Шул юл менән улар Чечняла рус хакимлығы урынлаштырырға итәләр, — тине башына таба ҙурлыҡ кәпәс кейгән 50—55 йәштәр самаһындағы ир.

— Рәсәй беҙгә үҙаллы йәшәргә барыбер ирек бирмәйәсәк, шулай булғас, бушҡа ҡан түгеүҙән ни файҙа? — тип яуап бирҙе уға офицер тауышын күтәрә биреп. — Йә, ярар, беҙ бында сәйәси темаға бәхәс ойошторорға килмәнек.

Ҡапитан кисәге курсанттарҙы урынлаштырҙы ла сығып китте. Әүен баҙарының ҡапыл өҙөлөүе арҡаһында бүлмәләгеләрҙең йоҡоһо ҡасҡайны инде. Амангилдиндың урыны бер һаҡалтай бәндә янына тура килде. Танышҡас, Йыһангир уның Рәсәй армияһы сафында дудаевсыларға ҡаршы байтаҡ ҡына һуғыштарҙа ҡатнашыуын аңланы. Исеме Сөләймән икән, чечен. Һул яғында федералдарҙы яҡлап, чечен боевиктарына ҡаршы һуғышырға килгән Мөслим исемле Дағстан егете ултыра. Махачкала вуздарының береһендә уҡытыусылыҡҡа белем алып йөрөгән кисәге студент икән. Чечендарға ҡаршы һуғышырға дәрт тотоп, уҡыуын ташлаған да дудаевсыларҙы ҡыйратырға тип килгән. Дағстан добороволецтарынан торған бер батальон яңы ғына төҙөлөп, уның һалдаттары, шул иҫәптән Мөслим дә һуғышҡа инергә тейештәр икән. Уларға хәрби кейем кейҙергәндәр, ә автоматтарҙы иртәгә бирәсәктәр. Йыһангир Мөслимдең авар милләтенән икәнен дә белеп алды.

Сөләймән Йыһангир менән яңы килгән йәш һалдаттарға күҙ һирпеп алды ла былай тине:

— Танауҙары ла кипмәгән молокосостарҙы һуғышҡа индерәләр. Быуындары шыйыҡ йәш малайҙар үҙҙәренең тәжрибәһеҙлеге арҡаһында яу яланында күпләп

ҡырылалар. Ә үлгәндәр урынына Рәсәйҙең һуғыш конвейеры меңәрләгән йәш һалдаттарҙы индереп кенә тора.

— Әлеге көндә һеҙ федералдар яғында һуғышаһығыҙмы әллә дудаевсылар яғындамы? — тип һораны Амангилдин күршеһенән.

— Хәҙергә мин нейтраль позицияла, — тине тегеһе тауышын артыҡ күтәрмәй генә.

— Аңламаным, — тине Йыһангир, һораулы ҡарашын Сөләймәндең уйсан ҡарағусҡыл күҙҙәренә төбәп.

— Һинең, ҡустым, аңламаған нәмәләрең күп әле. Һин түгел, беҙ аңлап бөтмәйбеҙ, үҙебеҙ бешергән бутҡа ҡаҙанында ҡайнаһаҡ та. Һинең һорауыңа ике ауыҙ һүҙ менән генә яуап бирерлек тә түгел.

Сөләймән бер аҙ уйланып ултырҙы ла һөйләй башланы:

— Беренсе һуғыш менән икенсе һуғыш араһындағы тыныс өс йылдың исеме генә тыныс булды инде. Был ваҡыт эсендә чечендар ваһһабизмға ҡаршы көрәштеләр. Битлек киймәгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы төрлөсә хурланылар. Минең ике һеңлемде күҙ алдымда көсләнеләр. Йөмһүриәт етәкселәре лә уларҙың мәғәнәһеҙ талаптарына, закондарына артыҡ юл ҡуйып, халыҡты үҙҙәренән биҙҙерҙе. Мин Дудаев һәм Масхадов режимына ҡаршы көрәшеү өсөн ҡулыма ҡорал алып, доброволец сифатында Рәсәй армияһы сафына баҫтым. Күптәр шулай эшләне. Әгәр ҙә тәүге һуғышта халыҡ Дудаев яҡлы булһа, Рәсәй һалдаттарына ҡаршы ҡорал тотоп һуғышһа, икенсе һуғыш башланғас, ул федераль ғәскәрҙәргә ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Киреһенсә, рустарҙың килерен көттө. Ләкин Рәсәй армияһы беҙҙең өмөттө аҡламаны, бер ғәйепһеҙ тыныс халыҡты аяуһыҙ рәүештә ҡыра башланы. Күп ауылдар, ҡалалар ер менән тигеҙләнеп, хараба хәлендә ҡалдылар. Бөгөн чечендарҙың тыныс халҡы төрлө өлкәләргә, республикаларға, ғөмүмән, сит илдәргә, алыҫ яҡтарға ҡасып китеп, таралып бөтә яҙҙы. Чечняла чечендар ҡалманы тиерлек. Ә мин, үҙ халҡымдың ауыр хәлдә тороп ҡалғанын күреп, федераль ғәскәрҙәрҙе ташлап киттем. Әйткәндәй, күп чечендар хәрбиҙәрҙең әшәке ҡылығына нәфрәтләнеп, Рәсәй армияһынан китте. Хәҙер нейтраль позицияла торһам да, Мәскәүҙең Кавказда үткәргән сәйәсәтен, ҡанлы эштәрен чечен халҡына ҡаршы үткәрелгән геноцид, тип иҫәпләйем.

— Бындағы һуғыштың бысраҡ ысулдар менән алып барылыуына хәҙер мин дә ышандым, — тип һүҙгә ҡушылды мөйөштә ултырған ир. Йөҙөнә ҡарағанда, уның рус кешеһе икәнлеге күренеп тора.

— Һеҙ был яҡ кешеһенә оҡшамағанһығыҙ, ҡайҙан килеп сыҡтығыҙ? — тип һораны Сөләймән әлеге заттан.

— Мин Петр Алексеевич булам, Екатеринбург яғынан.

— Кавказға ниндәй елдәр ташланы?

— Ҡара елдәр ҡара хәбәрҙәр алып килде беҙҙең ғаиләгә. Яңыраҡ ошо тирәлә, ҡала эргәһендәге Әүлиә зыяраты тип аталған ҡалҡыулыҡта, чечен боевиктары менән федералдар араһында ҡаты һуғыштар булған. Улым Виктор хатында ошо хаҡта яҙып ебәргәйне. 18 йәшлек маңҡаһы ла кипмәгән малайымды хәрби хеҙмәткә алдылар ҙа һуғыш тирмәненә килтереп тыҡтылар. Яңыраҡ хаты килгәйне, артынан үле хәбәре килеп етте. Замполит яҙған ҡара ҡағыҙҙа: “Улығыҙ Виктор разведкаға киткән ерҙән ҡайтманы”, — тип яҙылған. Ә малайымдың иптәше Александр былай тип яҙҙы: “Минең яҡын дуҫым Вик-

тор чечендарҙың нәүбәттәге атакаһы ваҡытында һәләк булды. Беҙ мәйеттәрҙе лә күмергә өлгөрмәнек, ашығыс рәүештә өс саҡрым самаһы артҡа сигенеп, яңы позицияға урынлаштыҡ. Ә һуғыш Әүлиә тауы тип аталған урында булды. Викторҙың мәйетен чечендар ергә күмгән булырға тейеш. Тик ҡайҙа күмгәндәрен белмәйем". Улымдың мәйетен табып, үҙебеҙгә алып ҡайтырмын да тәрбиәләп күмербеҙ, тип уйлағайным. Төрлө ерҙә ашыҡ-бошоҡ ҡына күмелгән ҡәберҙәрҙе хәҙер аҙна буйы асып ҡарайым. Улым тере саҡта үҙе яҙып ебәргән ориентирҙар буйынса мәйетен табырмын, тип өмөтләнәм.

Әлеге мин күргән ҡәберҙәрҙә рус хәрбиҙәре лә, чечен боевиктары ла, ябай халыҡ та ята. Рустарҙың да, чечендарҙың да күҙҙәре соҡолған, ҡолаҡтары, танауҙары, ҡулдары киҫеп ташланған. Тимәк, һәр ике яҡ бер-береһен язалап үлтергән. Йыртҡыслыҡта улар үҙ-ара ярышҡандар, яһиллыҡта бер-береһен уҙҙырырға тырышҡан. Үлгән һалдаттарҙы һай ғына соҡорҙарға һалып, өҫтәренә арлы-бирле генә тупраҡ һибеп киткәндәр. Мәйеттәрҙе эттәр, бүреләр, ҡоҙғондар ашаған. Етмәһә, чечендар Рәсәй һалдаттарының ҡәберҙәрен миналағандар. Уларға яҡын барыуы ла ҡурҡыныс. Урыҫ командирҙары ла мәғәнәһеҙ. Һуғышта үлгән һалдаттарын теләһә ҡайҙа, хатта сүплектәргә күмеп киткәндәр. Бөгөн генә ҡала эргәһендәге сүплекте ҡаҙып, ике Рәсәй һалдатының мәйетен таптым. Уларҙы христиандар зыяратына алып барып күмәйем тиһәм, ул да миналанған булып сыҡты. Ярай әле саперҙар килеп, шартлатып китте. Мин, кеше яллап, уларҙы рус зыяратына күмдерҙем. Рәсәй хөкүмәтенең, хәрби командованиеның үлгән һалдаттарға ҡарата вайымһыҙлығына, хәстәрлекһеҙлегенә хайран ҡалырлыҡ. Чечен командованиеһы менән һөйләшеп, һуғыш ҡырында үлгәндәрҙе кешесә ерләргә була бит.

* * *

Йыһангирҙың Ҡавказға оҙатылыуы өйҙәгеләрҙе ҡара ҡайғыға һалды. Сынтимер ҡарт ятҡанда ла, торғанда ла иң яҡшы доғаларын уҡып, Хоҙайҙан хәүеф-хәтәр, ҡурҡыныс янаған төбәктән ейәненең имен-аман йөрөп ҡайтыуын теләй ине. Йыһангирын уйлап, Гөлбиназдың да йөрәге һыҙлай. Ауыр уйҙарҙан аҙыраҡ булһа ла ҡотолоу ниәте менән ул үҙенә көн һайын бер шөғөл уйлап таба — ҡояшта уңа башлаған тәҙрә ҡормаларын, иҫкерә төшкән мендәр тыштарын алмаштыра, сабыйына кәзә мамығынан башлыҡ бәйләй. Көн һайын ике өйҙөң дә иҙәндәрен йыуып сыға, балаһын саф һауаға алып сығып, сквер буйлап йөрөй. Хеҙмәт — тормош гәүһәре тигәндәр бит. Йәштән эшкә өйрәнгән ҡатын бер генә минут та ҡул ҡаушырып ултырмай. Әле декабрь айы, көн дә ишек алдын тултырып ҡар яуа. Уны ла күрәп тора Гөлбиназ. Ә күңеле барыбер төшөнкө, күҙҙәре бойоҡ. Тышта бер аҙ эшләп алғас, өйгә кереп бикләнә лә дивандағы мендәргә йөҙө менән ҡапланып, балауыҙ һығып ала. Үҙе илай, үҙе Хоҙайға ялбара:

— Эй, Раббым, һөйөклө иремде ҡурҡыныстан ҡурсала, пуляларҙан һаҡла. Ҡескәй балаһы, ҡартайған олатаһы хаҡына ғаиләһенә иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға ярҙам ит!

Шунан балаһын күтәреп, Сынтимер ҡарт янына керә. Ҡилененең ҡыҙарған күҙҙәрен күрһә лә, ҡарт артыҡ бер нәмә лә төпсөнмәй. Ҡайныһының һағыш эсенә сумған күҙҙәренә ҡарап, Гөлбиназ да уны йәлләп бөтә алмай. Улар эстәре бүҫкәргәнсе һөйләшәләр, бер-береһен йыуаталар. Гөлбиназға еңел булып китә. "Ярай әле һөйләшеп ултырырға олатай бар. Ул булмаһа, яңғыҙым ни эшләр инем?" — тип ҡыуанып уйлап ала йәш ҡатын.

* * *

Амангилдинды һәм уның иптәштәрен бронетранспортерҙарға ултыртып, һуғыш барған урындарға оҙаттылар. Йыһангир артабан хеҙмәт итәсәк полк һирәк-мирәк кенә ағастары һерәйешеп ултырған ҡола яланда урынлашҡайны. Билдәләнгән урынға килеп еткәс, Йыһангир БТР-ҙан төшөү менән тирә-йүнде күҙҙән үткәрҙе. 200 метр самаһы алыҫлыҡта — хәрби конвойҙар йөрөгән шоссе. Юлдың арғы яғында һөҙәк тау башына һылашып ятҡан урман күренә. Ағастар өҫтөнә аҡһыл томан йәйелгән. Арыраҡ ҡая тауҙар теҙмәһе, сабып барған аттарҙы хәтерләтеп, офоҡ ситенә кереп юғала. Һалдат өсөн шомло, ят күренеш ине был. Яҡын-тирәлә йәшкелт-сыбар төҫтәге палаткалар теҙелеп киткән. Уларҙың эргәләренә ҡом тултырылған ҡапсыҡтар өйөлгән. Спецназсыларҙы төрлө роталарға тараттылар. Амангилдин беренсе батальондың беренсе ротаһына эләкте. Ротала йөҙҙән артыҡ һалдаттан ни бары ҡырҡлап тороп ҡалғайны. Ә инде полктың исеме генә полк. Яңыраҡ ҡына уның личный составында 900-ҙән артыҡ яугир булһа, бөгөн — 350 тирәһе генә. Билдәле, Рәсәй ғәскәрҙәре менән чечен боевиктары араһында булып торған бәрелештәр күп ҡорбан талап итә. Батальондарҙы яңы көс менән тулыландырып торһалар ҙа, уларҙағы һалдаттар һаны артмай, киреһенсә, кәмеүгә бара. Полк Грозныйға табан йүнәлеш алырға тейеш. Ләкин тыуған төйәктәренең һәр ҡарыш ере өсөн йәнен бирергә әҙер чечен ир-егеттәре еңелмәҫ бастион һымаҡ арҡыры төшкәндәр. Чечендар урмандарҙа, тау араларында партизан отрядтары ойоштороп, федераль ғәскәрҙәргә көтөлмәгән яҡтан һөжүм итәләр. Боевиктар ваҡ-ваҡ төркөмдәргә бүленеп тә, ҙур хәрби берләшмәләргә ойошоп та һуғышалар. Вағыраҡтары федералдарҙың тылына үтеп инеп, төрлө диверсиялар ойоштора. Партизандар, ғәҙәттә, тыныс халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә эш итә. Ауыл һәм ҡалаларҙа йәшәүселәр улар өсөн ҙур терәк. Полк командирҙары чечен партизандарын бик еңел генә еңербеҙ ҙә Грозныйға анһат ҡына үтеп китербеҙ, тип уйлағайнылар. Етмәһә, боевиктарҙы өркөтөрлөк мускулдары ла ташып торған кеүек ине. Полк командиры, элекке казак атаманы Самойлов смотр үткәргәндә һалдаттарға былай тип әйтергә ярата:

— Чечендарҙы еңеү һәм юҡ итеү өсөн көслө техника, ҡаты ҡул һәм дәү йоҙроҡ кәрәк. Шунһыҙ уларҙы еңеп булмаясаҡ. Ә инде беҙең техниканың көсөн, ҡулдың ҡатылығын, йоҙроҡтоң тослоғон тиҙҙән улар бик тиҙ тоясаҡ.

Тимәк, тиҙҙән чечендар менән ҡаты һуғыш буласаҡ. Күп тә үтмәне, урмандарҙа, бигерәк тә тауҙарҙа үҙҙәрен хужа итеп тойған чечен партизандарына һөжүм итергә бойороҡ бирелде. Командованиеның маҡсаты: тауҙарҙан чечен боевиктарын ҡыуып сығарыу һәм уларҙың базаларын юҡ итеү. Алыш ҡаты булды. Федералдар ҙа, партизандар ҙа ҡоралай кеүек бер урындан икенсе урынға һикереп, ҙурыраҡ таш артына йәшеренәләр ҙә автоматтан атырға керешәләр. Шулай күсенеп йөрөй торғас, ике яҡтың да яугирҙары буталышып бөттөләр, бер ваҡыт кемгә кем атҡанын да белмәй башланылар. Етмәһә, ергә төшкән томан тигеҙлектәрҙә таралып бөтһә лә, тау араларында сәғәттәр буйы таралманы. Таштар араһында һәр ҡуҙғалған кешегә ата торғас, полк һалдаттары бер-береһен дә атып һәләк итте.

Һан яғынан федералдарҙан ике-өс тапҡырға аҙ булһалар ҙа, өҫтөнлөк чечендар яғында булып сыҡты. Һәр һуҡмаҡты, һәр ташты яҡшы белгән боевиктар оҫта һуғыша ине. Хәйлә ҡороп, сигенгән булдылар ҙа федералдарға ҡаршы засада

ойошторҙолар. Бик күп Рәсәй һалдаты башын һалды ут аҫтында. Полк сигенә башланы. Ләкин чечендар уларҙың тылына үтеп инеп, сигенеү юлын бикләне. Паникаға бирелгән федералдар ҡамалған яҡҡа ташланды. Ләкин унда бөтә ер миналанған булып сыҡты. Полк яугирҙары бөтә көсөн туплап, һуғыша-һуғыша ҡамауҙы өҙҙөләр һәм артҡа сигенделәр. Ашыҡ-бошоҡ ойошторолоп, алдан ныҡлап әҙерләнмәгән хәрби операция һөҙөмтәһендә полк яртыһынан күберәк һалдатын юғалтты. Полковник Самойлов ҡыйратылыуҙы спецназ ғәскәрҙәре булмауына һылтаны.

Самойлов командованиенан таулы-урманлы урындарҙа чечендар менән һуғышыу өсөн махсус рәүештә өйрәтелгән спецназ ебәреүҙәрен һорап, юғарыға донесение ебәрҙе. Армия командующийы уның үтенесен кире ҡаҡманы, полкты спецназ ғәскәрҙәре менән тулыландырыу башланды. Тауҙарҙа нығынып, үҙ базаларын булдырған боевиктарға ҡаршы яңы поход әҙерләнә ине. Ләкин быны өсөн ул тауҙар ҡырында урынлашҡан бер нисә чечен ауылын юҡ итергә уйлай ине.

Полковник үҙҙәренә ҡаршы һуғышҡан чечен боевиктарының байтағы әлеге ауыл кешеләре икәнлеген белеп йөрөй. Партизандарҙы аҙыҡ-түлек, башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеүселәр ҙә урындағы халыҡ бит. “Әгәр ҙә ошо ауылдарҙы бөтөрөп, боевиктарҙы ризыҡһыҙ ҡалдырһаң, ас килеш дәррәү һуғыша алырҙар инеме? Юҡ, әлбиттә. Йорттарын емереп, бала-сағаларын, туған-тыумасаларын был тирәнән ҡыуып ебәрһәң, хужалары юҡҡа сыҡҡан ауылдарға беҙҙең казактар туласаҡ, чечендарҙың ерҙәре уларға тороп ҡаласаҡ”, — тип хыяланды ул.

Һуңғы ваҡытта полктың уңышһыҙлыҡҡа осрауы уйланырға мәжбүр итә. Уның батальондары бығаса тигеҙерәк урындарҙа, яландарҙа, һөҙәк тауҙарҙа, чечен ауылдарында, станицаларҙа һуғышҡайны һәм, ҙур ғына юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, әлеге һымаҡ ҡот осҡос ҡыйралышҡа дусар булмағайны. Полк командиры үлгән һалдаттарын, ҡыйралған техникаһын өҫтәгеләргә бик күрһәтмәҫкә тырыша торғайны. Ә инде дошманының юғалтыуҙары тураһында юғарыға хәрби сводка биргәндә берҙе биш итеп күрһәтергә ярата: “Нами была уничтожена батарея дальнобойной артиллерии чеченцев. Их плацдарм ликвидирован. Нашей артиллерией было подбито 8 БТР, 7 автомашин с пехотой, разбито 6 пулеметов, моторизованный отряд противника. Нашими доблестными воинами были ликвидированы сотни боевиков, в том числе гранатометчиков и несколько расчетов орудий...”

— Гел генә шундай матур сводкалар биреп ултырһаң икән ул юғары даирәләргә, — тип һөйләнеп ала ул үҙ алдына. — Юҡ шул. Был чечендар бик һуғышсан халыҡ, еңел генә еңерлек түгел. Ни тиһәң дә, улар үҙ еренең азатлығы, халҡының бойондороҡһоҙлоғо өсөн һуғыша. Етмәһә, үҙҙәре ғорур, яттарға бер ҙә теҙ сүгергә теләмәйҙәр. Әммә беҙ уларҙы барыбер еңәсәкбеҙ.

...Самойлов бойороғо нигеҙендә полкка Түбәнге Юрт һәм Үрге Юрт ауылдарында халыҡтың аҙыҡ-түлеген тартып алырға, ҡаршылыҡ күрһәткән кешеләрҙе атып үлтерергә ҡушылды. Полковник бер юлы ике ҡуян атырға уйланы. Беренсенән, кәбеҫтә һурпаһынан башҡа бер ни ҙә ашамаған ас һалдаттарын чечендарҙан талап алынған аҙыҡ менән туҡландырыу, икенсенән, ошо ауылдарға күҙ терәп торған чечен партизандарын аҙыҡ-түлекһеҙ ҡалдырыу, һуңғы ҡыйралыштар өсөн үс алыу, аҙаҡ авиация саҡыртып, ауылды бомбаға тоторға, ер менән тигеҙләргә.

* * *

Тау һырттарына иртәнге ҡояш тәүге нурҙарын һибә башлау менән Самойлов тревога иғлан итте. Ҡистән үк ул комбаттарға, ротныйҙарға чечендарға ҡаршы үткәреләсәк хәрби операция буйынса инструктаж биргәйне. Бер батальон полк урынлашҡан яланды, ундағы ауыр техниканы, милекте һаҡлау өсөн бивакта ҡалдырылды. Ҡалған ике батальон һалдаттарын һәм сержанттарын сафҡа теҙеп, ротныйҙар полк командиры ҡуйған заданиены аңлаттылар. Машиналарҙың кузовтарына тейәлеп, ҡуҙғалып киттеләр. Йыһангир хеҙмәт иткән 1-се батальон — Үрге Юрт, ә 2-сеһе Түбәнге Юрт ауылдарына табан икеһе ике юлдан китте. Тәүге батальондың бара торған юлы урман аша үтергә тейеш. Ә ауыл үҙе ҡая тауҙар эргәһенән ағып ятҡан Тур-тур йылғаһы үҙәнендә ята, тиҙәр. Бына машиналар колоннаһы урман аша һуҙылып киткән грунт юлынан үтә башланы. Иң алдан ике бронетранспортер, уларҙың артынан кузовтары брезент тент менән ҡапланған машиналар бара. Ҡолоннаның иң осонда САУ-100 үҙейөрөшлө артиллерия установкаһы килә ине. Унын артынан ауыл халҡынан тартып алынасаҡ аҙыҡты төйәү өсөн тәғәйенләнгән буш ике йөк машинаһы эйәргән. Ярты юлды үткәс, урман ҡарауылсыһының ағас йорто күренде. Самойлов ҡушыуы буйынса тиҫтәләгән метрға һуҙылған оҙон колоннаны туҡтаттылар. Полк командиры САУ башняһының эсендә рация аша үҙенең ярҙамсылары менән әленән-әле һөйләшеп, бойороҡтар биреп бара ине. Полковникка бер йорт өсөн тотош колоннаны туҡтатмаһа ла булыр ине, алда ҙур “эш” торғанда, төп иғтибарҙы ваҡ-төйәк нәмәләргә йүнәлтеү башлыҡҡа хас сифат түгел. Әммә Самойлов ундайҙарҙан түгел, ул бик ваҡсыл кеше. Ә инде чечендарҙың йорттарын күрһә, ене ҡуба. Был өйҙәрҙә көн иткән һәр затты ул дошман итеп иҫәпләй. Самойлов 1-се рота командиры Огурцовҡа сәйер приказын еткерҙе. ЗИЛ-130 кабинаһында ултырып килгән Огурцов ергә төшөп, 3-сө взвод егеттәре тейәлгән “Урал” машинаһы янына килеп ҡысҡырҙы:

— Сержант Машков, кесе сержант Амангилдин, рядовой Әбйәлиловҡа ҡоралдарын алып машинанан төшөргә, минең янға килергә!

Һалдаттар кузовтан һикереп төшөп, ротный эргәһенә килде.

— Ана тора йорт, — тине капитан өй яғына ымлап. — Шунда барып, тиҙ генә кәртә-ҡураны, йорт ҡаралтыһын ҡарап сығығыҙ! Өй, һарай, келәт, аҙбар, баҙҙарын тикшерегеҙ! Бер кем дә иҫән ҡалырға тейеш түгел! — Ротный егеттәргә тексәйгән күҙҙәре менән сәнсеп ҡараны. — Һорауҙарығыҙ юҡмы?

— Бар, — тине шул саҡ Йыһангир. — Әгәр ҙә ул йортта ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро булһа, приказ уларға ла ҡағыламы ни?

Был һүҙҙәрҙән командирҙың асыуы ҡабарҙы, сикәһендәге ҡан тамырҙары бүртенеп, күҙ төптәре ҡара янып сыҡты. Ул ҡыҙып китмәҫ өсөн үҙен саҡ-саҡ тыйып, һүҙҙәрен теш араһынан һығып тигәндәй сығарҙы:

— Чечендар — беҙҙең дошмандарыбыҙ. Дошмандың бала-сағаһы ла, ҡатын-ҡыҙы ла, ҡарт-ҡороһо ла — дошман, сөнки улар полк торған урынға яҡын килеп, беҙҙе күҙәтәләр һәм боевиктарға еткереп торалар. Полктың һуңғы уңышһыҙлыҡтарына ошо сәбәпсе.

Был һүҙҙәрҙән Йыһангирҙың башы әйләнеп китте. Тимәк, улар йортта кем бар, барыһын да атып үлтерергә тейеш. Ул чечен яугирҙарына ҡаршы һуғышырға тип килгәйне түгелме һуң? Ә уға бала-сағаны, ҡатын-ҡыҙҙы, ҡарттарҙы үлтерергә ҡушалар.

— Ярар, барығыҙ. Һеҙгә ун-ун биш минут ваҡыт бирелә. Шул ваҡыт эсендә приказды үтәп, кире әйләнеп килегеҙ! Буш машиналарҙың береһе һеҙҙе көтөп торор, ә колонна хәҙер ҡуҙғалып китәсәк. Йортта ҡулға төшкән аҙыҡ-түлекте ҡапсыҡтарға һалып, бында килтерегеҙ!

Отделение командиры Машков егеттәргә:

— За мной бегом! — тине лә әлеге йортҡа ҡарай йүгерҙе. Колонна юлын дауам итте. Амангилдин һәм уның иптәштәре абрикос, слива, тут ҡыуаҡтары һәм ағастары менән уратылған, таҡта ҡойма менән әйләндереп алынған, ҡыйығы тимер менән ябылған йорттоң ихатаһына килеп туҡтанылар. Ҡапҡа эстән бикле булмаған икән. Һалдаттар эске яҡҡа инеү менән өй эргәһенә тимер сынйыр менән бәйләп ҡуйылған башмаҡтай ҙур һоро эт уларға абалап өрөргә кереште. Ул ят кешеләргә ҡарап өрә-өрә лә саңҡылдарға тотона. Шул рәүешле йорт хужаһын саҡыра ине булһа кәрәк. Машков күп уйлап торманы, автоматтан эткә төбәп ике тапҡыр атты. Сержант башта кемдең нимә башҡарырға тейешлеген асыҡларға булды:

— Һин, — тине ул Йыһангирға, — йорт эсен тикшерерһең. Ә һин, Әбйәлилов, аҙбар, келәт кеүек өй ҡаралтыларын тикшереп сыҡ. Кем күренә — шуны юҡ ит! Унан тыш, аҙыҡ-түлеккә иғтибар итегеҙ! Он, ит — барыһын да ишек алдына сығарып ҡуйығыҙ! Ә мин һарайҙы тикшерәм.

Йыһангир шуны аңланы: Машковтың кеше ҡанына буялғыһы, ғәйепһеҙ бәндәләрҙе үлтереп ҡарғыш алғыһы килмәй, шуға өй эсенә үҙе инмәй. Бер ғәйепһеҙ кешене үлтереү өсөн йыртҡыс йәки фашист булырға кәрәк. Һуғышта, әлбиттә, хәл икенсе. Унда бер-береңде ҡыҙғаныу юҡ, сөнки дошманды юҡ итмәһәң, ул һине юҡ итәсәк. Ошондай ауыр һәм ғазаплы уйҙар менән ул соланға керҙе, өй ишеген шаҡыны.

— Эйе, керегеҙ! — тигән тоноҡ тауыш ишетелде эстән. Тауыш ете ҡат ер аҫтынан сыҡҡан кеүек ине.

Йыһангир автоматын уң ҡулына тотоп, ҙур ғына йорттоң алғы яғына үтте. Унда бер кем дә юҡ ине. Төпкө бүлмәгә ингәс, диван өҫтөндә ултырған оло йәштәге ҡартты күрҙе. Бабайҙың өҫкә табан таралған сәсе, күркәм ҡалын мыйығы ап-аҡ ҡар төҫөндә ине.

— Әссәләмәғәләйкүм! — тип иҫәнләште кесе сержант үҙенең мосолман йортона килеп ингәнлеген иҫенә төшөрөп.

— Вәғәләйкүмәссәләм! — тигән яуапты ишеткәс, Амангилдин ике ҡуллап ҡарт менән иҫәнләште. Ошонан һуң бабай, ниндәйҙер доға уҡып, битен һыпырып ҡуйҙы.

Йыһангирҙың ҡарашы стенаға эленгән рамдарҙағы фотоларға төштө. Ике хәрби кеше төшкән фотоһүрәт иғтибарын тартты. Ошондайҙы ул олатаһының альбомында ла күргәйне.

— Был фотолағы кешенең исем-фамилияһы кем? — тип һораны Йыһангир, олатаһының йәш ваҡыттағы һүрәтен таныһа ла.

— Ул Амангилдин Сынтимер тигән кеше. Әллә беләһеңме?

— Эйе, — тип яуап бирҙе Йыһангир ҡартҡа. — Ул — минең олатайым.

— Олатайың? Бына ҡайҙа осрашырға яҙған икән Сынтимерҙең ейәне менән. Рәсәй һуғыш артынан һуғыш сығарып ҡына тора. Һеҙҙең нәҫелгә лә, беҙҙең нәҫелгә лә һуғыштан айырылырға яҙмаған икән. Олатайың иҫәнме һуң? Һаулығы нисек?

— Иҫән-һау, Аллаға шөкөр.

— Беҙ олатайың менән яҡын дуҫ булдыҡ. Ватан һуғышында яу юлдарын бергә үттек, сәстәр ҙә шунда ағарҙы. Олатайың дуҫлыҡҡа тоғро, ғәййәр кеше ине. Рәсәй өсөн ауыр көндәрҙә ҡан түгеп, Гитлерҙан ҡотҡарып алып ҡалдыҡ. Ә бөгөн Рәсәй улдары беҙгә дошман күҙе менән ҡарай, беҙҙе ҡырағай йәнлек кеүек күреп, юҡ итергә торалар. — Шулай тине лә ҡарт үкһеп иларға тотондо.

— Ярай, олатай, тынысланығыҙ! — тип йыуатты ҡартты Йыһангир.

— Күңел йомшарып китте. — Ҡарт бармағы менән түшенә төртөп күрһәтте. — Был наградаларҙы миңә бушҡа ғына биргәндәрме ни? Бөгөн Рәсәй ғәскәрҙәре донъябыҙҙы пыран-заран килтереп ҡыйратһындар, өҙгөләһендәр һәм талаһындар өсөн түшкә ҡаҙанылармы ни был ордендарҙы һәм миҙалдарҙы?

Амангилдин ҡартҡа ентекләберәк ҡараны: өҫтөндә еҙ төймәле йәшел китель, түшендәге орден-миҙалдарының иҫәбе-һаны юҡ.

— Олатай, исемегеҙ нисек? — тип һораны йәш яугир.

— Мин Ильяс Билимханов булам. Һуғыштан имен-аман әйләнеп ҡайтһаң, олатайыңа күп итеп сәләм еткер!

— Ярар, еткерермен, Ильяс олатай. Әлеге мәлдә һинең ғүмереңә ҡурҡыныс янай. — Йыһангир уға бөтәһен дә аңлатып бирҙе.

— Тимәк, улым, миңә ҡайҙалыр йәшеренергә кәрәктер. Хәҙер уйлармын. Тышта соланда һеҙ килеүгә биш-алты ҡапсыҡ аҙыҡ-түлек тә әҙерләп ҡуйҙым.

— Беҙҙең килерҙе ҡайҙан белдегеҙ? — тип һораны Йыһангир аптырап.

Бабай аҡ тештәрен йылтыратып көлөп ебәрҙе. “Ҡарт булһа ла, тештәре иҫән икән олатайҙың”, — тип уйлап алды кесе сержант.

— Минең хәрби һөнәрем — танкист. Экипаж командиры. Иртәнге тынлыҡта һеҙҙең самоходкағыҙҙың тауышы бында ла ишетелде. Былар юҡҡа ғына ауыр техниканы ҡыҙҙырмайҙарҙыр, ҡайҙалыр ҡуҙғалырға уйлайҙар, моғайын, беҙҙе таларға киләләрҙер, — тип уйланым да аҙыҡ-түлек әҙерләп ҡуйҙым.

Был юлы Амангилдин көлөп ебәрҙе. Шунан ул ҡапыл етдиләнде:

— Олатай, урын табып, тиҙерәк йәшен! Тыштағылар инеп, үҙеңде атып ҡуймаһындар!

— Өйҙә йәшеренһәм, эҙләп табырҙар, тип ҡурҡам. Ғәйепле кеше һымаҡ әҙәм шикләндереп урманға сығып ҡасһам да атып үлтерерҙәр, тип уйлайым.

— Беҙҙең килерҙе белгәс, ниңә урманға йәшеренмәнең һуң? — тип һораны Йыһангир ҡартты йәлләп.

— Эй, улым, һарайҙа малдарым бар бит. Шуларҙы ташлап киткем килмәне. Уларға ла ышаныслы иптәш кәрәк бит.

— Үҙ башыңды һаҡла!

— Һарай тирәһендә һеҙҙең һалдаттарығыҙ йөрөй. Ул яҡҡа барып булмай. Ҡапма-ҡаршы яҡта бәҙрәф бар, шунда йәшеренәйем әле. Кем бәҙрәфте тикшереп йөрөһөн! Әбей менән бергә китһәм, аҡ һаҡаллы ҡарт була инем. Федералдар көн күрһәтмәй башлағас, уны башҡалар менән бергә Ингушетияға ебәргәйнем. Ул унда ҡасаҡтар лагерында йәшәй. Ә мин, донъя ҡарап, бында тороп ҡалғайным. Ғүмер буйы бөртөкләп йыйған донъяны ташлап китеүе лә ҡыйын шул.

— Һин, олатай, үҙеңде йәллә! Бар инде, йәшерен берәй ергә.

Ҡарт ашыға-ашыға өйҙән сыҡты ла бәҙрәф яғына юлланды. Уның артынса уҡ Йыһангир ҙа өйҙән сыҡты. Шул ваҡыт ҡапҡа асылып китте һәм Самойлов күренде. Уның менән бергә полк командирының ике һаҡсыһы һәм замполит бар ине.

Полковник хәрби колоннаны аҙыраҡ оҙатып барһа ла, артабан китмәне, кире әйләнде. Йорт алдына ингәс тә полк командиры бәҙрәфкә табан китеп барған Ильяс ҡартты күреп, ҡаршыһына осраған Амангилдинға асыулы тауыш менән:

— Ҡесе сержант, ниңә был ҡартты ҡасыраһың, ниңә атып үлтермәнең? — тип ҡысҡырҙы.

Шунан ул өй хужаһына аҡырып ебәрҙе:

— Ҡире әйлән, ҡарт дуңғыҙ!

— Мин бисәң түгел йүгереп йөрөргә, — тип яуап бирҙе ҡарт ғорур тауыш менән.

— Ҡара әле, нисек һөйләшә ҡарт шайтан.

Самойлов Амангилдиндан:

— Ҡайҙа ҡалғандарығыҙ? — тип һораны.

— Һарай яғына киткәйнеләр.

— Хәҙер үк саҡырып килтер!

Йыһангир һарай янына йүгереп барһа, Әбйәлилов менән Машков ҡыйыҡ аҫтынан сығып торған өрләккә бер һимеҙ һарыҡты аҫып ҡуйғандар ҙа шуны тунап маташалар.

— Һеҙҙе полк командиры саҡырта! — тине Амангилдин борсоулы тауыш менән. Яртылаш туналған һимеҙ һарыҡ түшкәһен ташлап китеүе йәл булһа ла, командир янына йүгерҙеләр.

Ярһыуын саҡ-саҡ тыйып торған полк командиры Машковҡа еткерҙе:

— Иптәш сержант, ҡайҙа юғалып йөрөйһөгөҙ?

Ҡурҡышынан йәне табанына киткән Машков тегегә:

— Иптәш полковник, беҙгә ротный аҙыҡ-түлек табырға ҡушҡайны. Һарайҙа һарыҡтар күрҙек тә шуларҙың береһен һуйып алып ҡайтырға булдыҡ. Әле шул һарыҡтың тиреһен тунап тора инек, — тине.

— Иптәш полковник, һарыҡ ите тәмле була, — тип өҫтәне Әбйәлилов та Машковтың һүҙен ҡеүәтләп.

Егеттәрҙең был яуабына Самойлов көлөргә лә, асыуланырға ла белмәне. Һалдаттарҙың полк өсөн аҙыҡ-түлек хәстәрләп йөрөүен белгәс, уларға ҡарата асыуы һүрәнләнде.

— Ә ниңә был басурманды дөмөктөрмәнегеҙ? Уны йәһәннәмгә оҙатҡас, һарыҡ менән боларыр инегеҙ! — тине ул Ильяс ҡартҡа бүре һымаҡ ҡарап.

— Ғәйепһеҙ тыныс халыҡты үлтереп йөрөгәнең өсөн үҙең йәһәннәм утында янырһың әле, — тине уға ҡарт.

— Һарыҡҡа тотонор алдынан ҡурғаш менән ошо албаҫтының өңөн тығырға ине, — тип өтәләнде Самойлов Машковҡа ҡарап.

— Мин ул эште кесе сержант Амангилдинға тапшырҙым, ә үҙебеҙ аҙыҡ-түлек әҙерләү менән шөғөлләндек, — тип яуап бирҙе Машков ғәйепте Йыһангирға япһарып.

— Мин дә тик ултырманым. Ошо ҡарт ярҙамында полк һалдаттары өсөн аҙыҡ-түлек әҙерләнем, — тине кесе сержант үҙенең дә, Ильяс олатайҙың да хәлен еңеләйтергә тырышып. Ләкин был һүҙҙәр командирҙың күңелен йомшарта алманы.

— Ярар, — тине ул Машков менән Әбйәлиловҡа, — тиҙ генә һарыҡты тунап бөтөрөгөҙ ҙә түшкәһен машинаға алып барып һалығыҙ. Юғиһә күптән һарыҡ ите ашаған юҡ.

Тегеләр боролоп һарай яғына йүгерҙе.

— Һарыҡ ите ашағанда һөйәге тамағыңа торһон! — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Ильяс ҡарт. — Рөхсәтһеҙ кеше малын талап йөрөйһөгөҙ.

Полковник иғтибарын Амангилдинға йүнәлтте:

— Мин һеҙҙе хәрби дисциплинаға өйрәттем, — тине ул Йыһангирға. — Һеҙҙән ысын һалдат яһаным, һуғышсы тәрбиәләнем, ә һеҙ приказды нисек үтәргә кәрәклекте лә белмәйһегеҙ! Был ҡартты хәҙер үк үлтер!

— Илебеҙҙе һаҡлап, беҙҙең өсөн ҡан түккән һуғыш ветеранын бер ғәйепһеҙгә атып үлтерә алмайым. Һеҙ уның түшенә ҡарағыҙ. Ҡарттың орден-миҙалдары уның ил өсөн батырҙарса һуғышҡанын күрһәтә.

— Төкөрҙөм мин уның орден-миҙалдарына! Һиңә приказ бирелдеме? Бирелде. Үтә! Юғиһә, приказды үтәмәгәнең өсөн үҙеңде атам! Ә ҡарт иҫән ҡаласаҡ. Икенең береһен һайла!

— Юҡ. Мин уны, олатай тейешле кешене, атмайым. Атһағыҙ, үҙемде атығыҙ! — тип, Амангилдин автоматын ергә бәрҙе.

— Ярай, үҙеңде атабыҙ, былай булғас. — Күҙҙәренә ҡан һауған полковник кобураһын ысҡындырып, пистолетын тартып сығарҙы.

— Улым, хаталанма, — тине Йыһангирға Билимханов. — Һин йәшһең, йәшәргә тейешһең. Ә мин ашарын ашағанмын, мине ат! Йәлләмә.

Ошо мәлдә ҡайҙандыр өҫтән, ағас башынан автоматтан атҡан тауыш ишетелде. Самойлов, уның ике һаҡсыһы һәм замполит ергә ҡоланы.

— Ғүмерең бөтмәһә, кеше һуғышта ла үлмәй. Бына һин дә үлемдән ҡотолдоң. Иншалла, илеңә иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға яҙһын, — тине Амангилдинға Ильяс ҡарт һәм былай тип өҫтәне: — Һеҙгә хәҙер чечен һуғышсылары һөжүм итәсәк. Улар бөтә урманды ҡыҙырып йөрөйҙәр. Тиҙерәк ҡас, балам!

— Ә һин беҙҙекеләрҙән ҡасып ҡотол! Хәҙергә баҙыңа булһа ла кереп ят! Һарай эргәһендәгеләр атып китмәһендәр үҙеңде.

— Ярай, улай булғас, шулай итәйем әле. — Ильяс ҡарт йүгерә-атлай өйөнә кереп китте һәм ҡабат күҙгә күренмәне.

Йыһангир ерҙә ятҡан автоматын ҡулына алды. Атыу тауышын ишетеп, Машков менән Әбйәлилов килеп етте. Ерҙә ятҡан полк командирын һәм уның иптәштәрен күргәс, аптырашып, иҫтәрен йыя алмай торҙолар.

— Ә беҙ теге чечен ҡартын ожмахҡа ебәрҙегеҙ икән, тип уйлағайныҡ. Ул бабай ҡайҙа булды? — тип һораны отделение командиры кесе сержанттан.

— Урман яғына ҡасты, — тип алданы Амангилдин.

— Ә ниңә атманың?

— Уны атмаһаң, һиңә донъя тармы ни? Полковник иҫәрләнеп ҡартты атырға уйламаһа, бәлки, үлмәҫ тә ине, — тине Йыһангир.

Сергей өйгә керергә уйлап болдорға күтәрелеүе булды, тағы ла атҡан тауыш ишетелде. Был юлы сержанттың бүреге ергә осто. Машков шаңҡып, бер ни аңламай баҫып торҙо. Шунан бүреген ерҙән алып, башына кейҙе лә өй эргәһенән ситкәрәк барып баҫты.

— Бәлки, полк командирын атҡан кешене табып юҡ итергә кәрәктер? — тине Рәсим.

— Урман эсендә уны ҡайҙан тотаһың? Был ерҙән тиҙерәк китергә кәрәк.

Ҡөтмәгәндә автоматтарҙан атҡан тауыштар ишетелде. Һалдаттарҙың баш осонан ғына пулялар һыҙғырып осто, берәүһе Йыһангирҙың бушлат еңен йыртып үтеп китте. Күп уйлап торорға ваҡыт юҡ ине. Машков менән Әбйәлилов

икәүләшеп — Самойловты, ә Амангилдин замполитты йөкмәп, юлға табан киттеләр. Күп тә барманылар, алғы яҡта туптар гөрһөлдәгәне ишетелде. Чечендар пушкаларҙан САУ-ҙы шартлаттылар. Башня эсендә снарядтар булғанлыҡтан, шартлау иҫ киткес көслө булды. Ярай әле, егеттәр йыраҡтараҡ ине. Мәйеттәрҙе күтәреп барыуҙың мәғәнәһе ҡалмағайны. Улар үлектәрҙе ҡалдырып, урман эсенән полк торған ялан яғына табан йүнәлделәр. Ҡиткән саҡта тегеләрҙең төҙөк автоматтары дошманға ҡалмаһын өсөн затворҙарын һурып алып, үҙҙәре менән алдылар. Шулай уҡ, кәрәге тейер тип, патронлы магазиндарын да үҙ-ара бүлештеләр. Сүп өҫтөнә сүмәлә тигәндәй, кәйефкә кире йоғонто яһап, өҫтән ямғыр яуырға кереште. Ҡапыл ел көсәйҙе. Шомло итеп урман шаулай башланы.

* * *

Егеттәр күп тә барманылар, бөтә яҡтан да чечен боевиктары тарафынан ҡамалғанлыҡтарын аңланылар. Һуғышыуҙан башҡа сара юҡ ине. Шунлыҡтан, соҡорораҡ урын табып, түңәрәк оборона тоторға булдылар. Һәр кем йыуанораҡ ағас һайлап, шуның артына ышыҡланып ятҡан килеш дошмандарҙың яҡынайғанын көттө.

Амангилдин бер боевиктың бер урындан икенсе ергә күскән сағында автоматтан атып ебәрҙе. Тегеһе тас салҡан йығылып, ергә ҡоланы. Уның артынса уҡ Рәсим дә, Машков та йүгереп килгән чечендарға бер-бер артлы атып ебәрҙеләр. Уларҙы артыҡ яҡын ебәреү ҡурҡыныс ине. Штык йәки бысаҡ һуғышында чечендар һис шикһеҙ еңәсәк, сөнки улар күмәк.

Боевиктар ярһып һөжүмде көсәйттеләр. Аңғармаҫтан чечендар яғынан ырғытылған граната Амангилдиндың эргәһенә гөп итеп килеп төшөүгә ул йәшен тиҙлегендә “лимонка”ны ҡулына эләктереп, кире ырғытты. Тегеләр яғында көслө шартлау тауышы яңғыраны. Ҡемдер ҡаты ыңғырашты, кемдер ҡатлы-ҡатлы итеп һүгенде. Сергей Машков ҡыуанысын йәшерә алмай:

— Молодец, Амангилдин! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, үҙе лә граната ырғытты. Рәсим дә “лимонка”һын үҙенә табан шыуышып килгән партизандар өҫтөнә елгәрҙе.

Әммә чечендар тағы бер граната ырғыттылар. Ул Рәсим ятҡан ергә яҡын ғына урында шартланы. Уның бер ярсығы Әбйәлиловтың ҡулын йәрәхәтләп, терһәгенән аҫҡараҡ инеп ултырҙы. Һалдаттың бушлат еңе буйлап усына йылы ҡан аға башланы.

— Йыһангир, мин яраландым, яраны бәйлә әле тиҙ генә!

Амангилдин, кәрәге тейер тип, үҙе менән аптечка йөрөтә ине. Эйелгән килеш тиҙ генә йүгереп яҡташы эргәһенә килде.

— Яраландыңмы ни, ағай? — тине лә Рәсимдең ҡулын йәрәхәтенән өҫтәрәк быуып бәйләне. Бинтты ул бушлат еңенең тышынан бер нисә тапҡыр уратып ҡуйҙы, яралыны сисендереп тороу өсөн форсат та, ваҡыт та юҡ ине. Ҡан туҡтаны.

— Рәхмәт, ҡустым. Ярҙамыңды онотмам.

— Бирешмә, яҡташ. Мин киттем, — тине лә Амангилдин үҙ урынына йүгерҙе.

Ул арала чечендар Йыһангир ятҡан ағас төбөнә яҡын уҡ килеп еткәйнеләр. Ҡесе сержанттың ике гранатаһы бар ине. Ул ергә ятты ла подствольнигына граната ҡуйып, яҡындағы боевиктарға йүнәлтте. Сергей ҙа атып ебәрҙе.

Шартлау тауыштары урманды тағы ла яңғыратты. Шуның артынса уҡ егеттәр автоматтарҙан ут бөрктөләр. Запас пулялары булғас, яугирҙар патрондарҙы бик йәлләп торманылар. Ҡөслө ут аҫтына эләккән боевиктар, үлгән һәм яраланған һалдаттарын йөкмәп, артҡа сигенделәр. Быны күреп, егеттәр ағастар араһынан полк урынлашҡан лагерь яғына табан йүгерҙе. Уларға нисек тә ҡамауҙан ҡотолорға кәрәк ине. Боевиктар ҡыуа төштө һәм ҡайтанан ҡамап та алдылар. Амангилдин һәм уның иптәштәре йүгереү буйынса чечендарҙан ҡайтыш ине. Тамаҡтары туҡ, физик яҡтан таҙа, көр чечендар менән алышырлыҡ көстәре лә самалы, ләкин саялыҡ, еңеүгә булған ышаныс чечендарҙыҡынан бер ҙә кәм түгел. Таймаҫ өс тағанға әүерелгән яугирҙар ергә ятып, үҙҙәренә табан яҡынлашҡан боевиктарға автомат утын бөрктөләр.

Шул ваҡыт Йыһангир артта ятҡан Машковтың:

— Амангилдин, помоги! — тигән тоноҡ ҡына тауышын ишетте.

Боролоп ҡараһа, тәне семерләп китте. Таҙа кәүҙәле һаҡалтай Сергейҙы еүеш үлән өҫтөнә салҡан әйләндереп һалған да, өҫтөнә менеп ултырып, сержанттың муйынын быуа. Машковтың күҙҙәре бына-бына атылып сығырҙай булған. Йыһангир былар янына йүгереп килеп, боевиктың башына типте. Чечен яугиры Машков өҫтөнән ергә ҡолап төштө. Ул ҡоралын алып өлгөргәнсе Амангилдин уның муйынын автомат уты менән киҫтерҙе. Һаҡалтай йәл булып китте. Ни тиһәң дә, чечендар тыуған илдәренең азатлығы өсөн көрәшә. Ә ғүмер һәр кемгә ҡиммәт. Ҡамауҙан ысҡындырһалар, иҫән ҡалған булыр ине. Эй, яҙмыш...

Шул ваҡыт Сергей кесе сержанттың уйҙарын бүлдерҙе:

— Амангилдин, мине үлемдән ҡотҡарғаның өсөн һиңә ҙур рәхмәт! Тиҙерәк позицияңа бар! Чечендар тағы ла һөжүмгә күстеләр.

Өс Рәсәй һалдатының ҙур ғына көстө үҙҙәренә йәлеп итеүен боевиктар оҡшатманы, күрәһең. Бер тинлек ҡуян, мең тинлек зыян, тип уйланылар ахырыһы. Улар, ғәскәрҙәрен был участканан алып, икенсе ергә, ҙурыраҡ бәрелештәр барған урынға күсерҙеләр. Шуның менән урмандағы атыш та тымды. Амангилдин һәм уның иптәштәре был хәлгә ышанмай торҙолар. Әллә берәй төрлө мәкер-хәйлә уйланылармы?

Рәсим түҙмәне, тирә-яҡты ҡарап сыҡты. Шикләнерлек бер нәмә лә күрмәгәс, ул ҡысҡырып ебәрҙе:

— Чечендар юҡҡа сыҡҡан! Улар беҙҙе ташлап киткәндәр! Ура! Беҙ еңдек!

— Беҙ еңдек! — тип ҡысҡырҙы Сергей ҙа балаларса ҡыуанып.

Өс егет еңеү хөрмәтенә автоматтарҙан залп бирҙеләр һәм ҡайтыу яғына табан атландылар. Бер сәғәттән улар полк торған урынға ҡайтып еткәйнеләр инде. Чечендар менән һуғышып, имен-аман әйләнеп ҡайтҡан егеттәрҙе башҡа һалдаттар һырып алды. Китте һорашыу! Полк командиры Самойловтың ниндәй шарттарҙа һәләк булыуы бөтә батальонды шаҡ ҡатырҙы.

Төш ауғас, Түбәнге һәм Үрге Юрт ауылдарында йәшәүсе чечендарға ҡаршы ҡоралды көс ҡулланырға ебәрелгән батальондар ҙа ҡайтып етте. Улар юлда барғанда засадаға эләгә. Боевиктар яғынан яһалған көтөлмәгән һөжүмдән Рәсәй ғәскәре ҡаушап ҡала һәм байтаҡ яугирын юғалта. Тиҙерәк был ҡурҡыныс урындан китеү яғын ҡарайҙар һәм артҡа сигенәләр. Шулай итеп, чечен граждандарына ҡаршы ойошторолған хурлыҡлы поход уңышһыҙлыҡҡа осрай һәм батальондар полк торған урынға кире әйләнеп ҡайтырға мәжбүр була...